ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

9-15 май (һабанай) 2015

№ 19 (645)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Утта янмай, һыуҙа батмай...



3

Йорттарға нур өҫтәгәндәй



4

Һеҙҙең батырлыҡты беләбеҙ...



8

Ветеран һүҙе...

аҡылдың үҙе



9

Сканворд 14

**ИҒТИБАР! АРЗАН ХАҠҠА ЯҘЫЛЫҒЫҘ!**

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 14 майҙан 23 майға тиклем матбуғат баҫмаларына яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо ун көнлөктә Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө"гә 469 һум 02 тингә (махсус индекс - BO665), юридик шәхестәр 475 һум 02 тингә (махсус индекс BO673), һуғыш ветерандары 417 һум 18 тингә (махсус индекс - BO665) яҙыла ала.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *XX быуатта кешелекте тетрәткән иң яман афәт - Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға һәм Бөйөк Еңеүгә - 70 йыл. Тиҫтәләрсә миллион кешенең ғүмерен өҙгән, ҡатындарҙы - тол, балаларҙы етем иткән, яҙмыштарҙы селпәрәмә килтергән ошо ҡан ҡойош киләсәк быуындарға ғибрәт бирҙеме?*

***Салауат РӘХМӘТУЛЛИН, 67 йәш:*** Был һорауға яуап биреү еңелдән түгел. Минең фронтовик атайым: "Ошо һуғыштан һуң башҡа ҡан ҡойош булмаҫ, кеше аҡылға килеп, ҡоралға ҡабаттан тотонмаҫ, тигән ышаныс менән ҡайттыҡ", - тип һөйләй торғайны. Ысынлап та, донъяның күп өлөшөн, бигерәк тә алдынғы дәүләттәрҙе ялмап алған ҡан ҡойош бөтәһенә лә һабаҡ бирергә тейеш кеүек ине. Ләкин һуғыштар бер ҡасан да тиерлек тамамланманы. Туғандар, таныштар араһында Афған, Кавказдағы ҡыҙыу нөктәләрҙә хеҙмәт итеүсе егеттәр булды. Шуға күрә, донъяла тыныслыҡ булғаны юҡ, тип раҫлай алабыҙ. Икенсе яҡтан, ҙур һуғыштар булмағанына шөкөр итергә ҡала. Бында, бәлки, ҡеүәтле дәүләттәрҙең атом ҡоралына эйә булыуы ла һуңғы роль уйнамай ҡалмайҙыр. Һуғыш була ҡалһа, окопта йәшенеп ҡалыу мөмкин булмаясағын аңлай бит улар. Шуға күрә лә, дәүләттәр бер-береһенән ҡурҡынҡырай. Әгәр бер көндә ниндәйҙер аҡылдан яҙған кеше ошо дәүләттәрҙең береһенең башына килеп торһа, нимә буласағы хаҡында уйлауы ла ҡурҡыныс. Һуғыш ғибрәте ул ҡан, гендар менән күсә торған нәмә түгел. Шуға күрә лә, кешелек сираттағы ҙур ҡан ҡойош менән осрашмаясаҡ, тип бер кем дә гарантия бирә алмай.

***Урал КИЛДЕҒОЛОВ, 45 йәш:*** Юҡ, ғибрәт алманы. Үкенескә күрә, беҙ ул һуғыштың һабаҡтарын тиҙ арала онотточ. Бөгөн ата-бабаларыбыҙ ҡасандыр фашистарҙан азат иткән ерҙәрҙә ҡабаттан неонацистик ҡарашлы кешеләр килеп сыға, ошо еңеүгә, уны яҡынлаштырыусы кешеләргә ҡарата нәфрәт менән тулы ҡырын ҡараш күҙәтелә. Йыраҡҡа китәһе түгел, бөгөнгө көндә күрше Украинала власҡа Бендера менән Шушкевичтың идеяларын яҡлаған кешеләр ынтыла, үҙ дәүләттәрендә ҡан ҡойош ойоштора. Рәсәйҙә лә уларға теләктәшлек күрһәтеүсе кешеләр юҡ түгел. Нинә былай килеп сыкты һуң? Беҙ патриотик тәрбиәне онотточ. Мин мәктәптә уҡығанда был мәсьәләгә ҙур иғтибар бүленә торғайны. Мәктәпкә ветерандар, хәрби кешеләр саҡырылды. Улар һуғыш, еңеү хаҡында һөйләй торғайны. Беҙ уларға, улар килтергән еңеүгә хөрмәт менән ҡараныҡ. Ә бөгөн мәктәптәрҙә ошондай тәрбиә бармы? Һуңғы ваҡытта ғына ыңғай күренештәр күҙәтелә, ил етәкселеге тарафынан ошо мәсьәләгә иғтибар бүленә башланы. Был беҙҙең дәүләт хаҡында. Ә бит шул уҡ Украинала, Балтик буйы илдәрендә Советтар Союзы тарҡалғас та ошо дәүләт менән бәйле бар иҫтәлектәр, ҡиммәттәр, шул иҫәптән Бөйөк Еңеү хаҡындағы ҡараш та, үҙгәртелде, онотторолдо. Ана шулай итеп тарихты боҙоп аңларға тырышыу бар бәләләрҙең башы булды ла инде, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!




*Фотола Ләйлә Сөләймәнова.*

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӨЛГӨЛӨ БУЛАЙЫҠ!

**Сәғиҙулла БАЙЕГЕТ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:** Былтыр 27-30 сентябрь көндәрендә беҙ, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры коллективы, 95 йыллыҡ юбилейыбыҙ айҡанлы Ырымбурға гастролгә сыҡтыҡ. Сығыш яһаған арала ижадташтарым менән Каруанһарай мәсетенә барҙыҡ. Баҡтиһәң, был мәсеттә Сибайҙан күсеп килгән Баймөхәмәт хәҙрәт имам булып тора икән. Беҙҙе бик матур ҡаршы алып, сәйҙәр эсереп, әңгәмәләшеп ултырҙыҡ. Хәҙрәттең шундай һүҙҙәре күңелгә уйылды:

- Халҡыбыҙ бөгөнгө көндә бик ныҡ күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән. Ошондай төшөнкөлөктән сығыуҙың иң дөрөҫ юлы - ул иман юлы. Ә ул юлды башҡаларға иң беренсе булып һеҙ, сәнғәт һәм мәҙәниәт әһелдәре күрһәтергә тейешһегеҙ...

Уның фекере менән килешмәй булмай: халҡыбыҙ өсөн тәү сиратта тап интеллигенция вәкилдәре өлгө булырға тейеш. Иман юлында ғына түгел, ғөмүмән, тормошта килеп тыуған һәр ситуацияла башҡалар үҙҙәренең зыялыларына ҡарап өлгө ала бит. Мәҫәлән, зыялыларҙың балалары матур итеп башҡорт телендә һөйләшә икән, тимәк, уға ҡарап, башҡа милләттәштәр ҙә сабыйҙары менән тик башҡорт телендә генә аралаша башлаясаҡ. Йәмәғәт урындарында, сит милләттәр араһында ла үҙ туған телеңдә аралашыуҙан ҡурҡмау кәрәк. Күрәбеҙ бит, ситтән килгән милләт вәкилдәре бер ҙә тартынып тормай, кемдер нимәлер әйтер тип тә ҡурҡмай, ирәүәнләп йәшәп ала ла китәләр. Беҙгә лә үҙ илебеҙҙә үҙ көйөбөҙҙө көйләп, үҙ асылыбыҙҙы һанлап йәшәргә лә йәшәргә кәрәк. Өлгө алырлыҡ шәхестәребеҙҙе күрә беләйек, үҙебеҙҙең хаталарҙы төҙәтә алайыҡ. Иң мөһиме, ата-бабаларыбыҙ рухына хыянат итмәҫ өсөн иманлы һәм батыр булайыҡ!

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## XX быуатта кешелекте тетрәткән иң яман афәт - Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға һәм Бөйөк Еңеүгә - 70 йыл. Тиҫтәләрсә миллион кешенең ғүмерен өҙгән, ҡатындарҙы - тол, балаларҙы етем иткән, яҙмыштарҙы селпәрәмә килтергән ошо ҡан ҡойош киләсәк быуындарға ғибрәт бирҙеме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Илдар СӘҒИТОВ, 23 йәш:*** Һуғыш ул килеп тыуған проблемаларҙы хәл итеүҙең иң ябай, ҡулай, еңел ысулы. Иҡтисади, сәйәси, социаль көрсөк хаҡында оноттороу өсөн тышҡы йәки эске дошманды уйлап сығарып, шуға ҡаршы көрәште ойоштороп, иғтибарҙы икенсе яҡҡа йүнәлтергә була. Беҙ бөгөн Бөйөк Ватан һуғышын Голливуд киноһы кеүек күҙ алдына килтерәбеҙ, романтика кеүек тойола ул. Ләкин һуғыштың ауыр эҙемтәләрен ҡабул итергә теләмәйбеҙ. Йыш ҡына йәштәштәремдән, АҠШ менән Рәсәй араһында һуғыш башланһа, Америка еңәсәкме, әллә беҙме, тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Ҡағиҙә булараҡ, ошо һүҙҙәрҙән һуң ике дәүләттең ҡоралды көстәренең мөмкинлектәрен, уларҙың мораль әҙерлеген сағыштырыу китә. Иң үкенеслеһе, беҙ көслөрәкме, әллә НАТО илдәреме, тигән бындай сағыштырыуҙарҙы ябай халыҡ араһында ғына түгел, телеэкрандарҙа юғары чиновниктар, билдәле шәхестәр араһында ишетергә тура килә. Йәмғиәт һуғышты ниндәйҙер тамаша кеүек ҡабул итә, бына ул башланыр ҙа, беҙ ситтән тамашасы булып күҙәтеп торорбоҙ, тип уйлай. Тыштан мең тапҡыр, беҙ һуғышҡа ҡаршы, тип әйтһә лә, күңеле менән "еңеүгә килтерәсәк бәләкәй һуғыш" көҫәй. Был үҙенә, дәүләткә ниндәйҙер этәргес бирер ине, тип алдана. Юҡ, һуғыш Голливуд фильмы түгел һәм ул, Аллам һаҡлаһын, башланып китһә, иң тәүҙә ябай халыҡты, йәш егеттәрҙе йотасаҡ. Балалары күптән инде сит илдә ныҡлап урынлашҡан "илһөйәрҙәрҙең" уландары, кейәүҙәре, ҡорал алып, фронттың алғы һыҙығына китмәйәсәк, ҡыҙҙары-килендәре медперсонал булып яралыларҙы яу ҡырынан сығармаясаҡ. Хатта халыҡ асыҡһа ла, уларҙың үҙҙәренең матди хәлдәре артыҡ ҡаҡшамаясаҡ. Бөгөнгө көндә прогрессив кешелектең, ниндәй милләттән, диндән, ниндәй ил гражданы булыуына ҡарамаҫтан, үҙ дәүләтенең милитар сәйәсәтенә ҡаршы һүҙ әйтеүе - уның төп бурыстарының береһе булып тора, тип уйлайым. Ысын илһөйәрлек менән халыҡты иҫертеүсе пропаганда ҡоралына әйләндергән һәм уны сираттағы фанатизмға этәргән "илһөйәрлекте" лә айырырға өйрәнергә ваҡыт.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

ИШАРА

# АҢЛЫ ӘСӘ, АҢҺЫҘ ӘСӘ...



**Ике әсә һөйләшә. Икеһенең дә балаһы башланғыс класс уҡыусыһы, күрәһең. Кескәйҙәренең мәктәптән арып ҡайтыуы, өйгә бирелгән эштәрҙе нисек үтәүҙәре, ниндәй тәьҫораттар менән ҡайтыуҙары тураһында ине гәптәре.**

Берәүһе ҡыҙының башҡорт теленән өлгәшмәүенә зарланды. "Бер кемгә лә кәрәкмәгән дәрес ул бөгөн. Бына мин үҙем башҡорт булһам да, бер ҡасан да башҡортса һөйләшмәнем. Балаларҙың башын ғына бутайҙар. Аҙнаһына бер-ике сәғәттә нимәгә өйрәнеп була инде? Унан баш тартыу тураһында кемгә ғариза яҙырға икән?"- тип, икенсеһенә мөрәжәғәт итте.

Икенсеһенең яуабы ифрат көтөлмәгәнсә яңғыраны.

- Балаң 4-се класҡа етте, һин һаман бер һүҙҙе һөйләйһең. Аҙнаға ике сәғәт булһа, айына-йылына байтаҡ йыйыла бит. Уның ҡарауы, башҡа бер ҡайҙа ла ала алмаған белемгә эйә була. Үҙеңдең туған телең бит, әсәйең һөйләшкән тел. Үҙең яратмағас, ҡыҙың да уны өйрәнгеһе килмәйҙер. Мин үҙем урыҫ булһам да, улым башҡорт телен мотлаҡ өйрәнәсәк. Үҙенең тыуған республикаһы, Башҡортостан тарихы, уның арҙаҡлы шәхестәре, мәҙәниәте, тарихи ҡомартҡылары тураһында тағы ниндәй дәрестә өйрәнер һуң ул юғиһә?

Ҡатын артабан үҙенең ике йыл элек Төркиәлә ял иткәндә нисек оятҡа ҡалыуын һөйләне:

- Төрлө илдән йыйылған бер төркөм туристар менән гел бергә йөрөргә тура килде. Тәүге көндәрҙә сит ил кешеләре менән аралашыуҙан, бөтөнләй таныш булмаған ят мөхиттән алған тәьҫорат бик көслө булғандыр, иғтибар итмәгәйнем. Бер нисә көндән яңы таныштар менән аралашҡанда үҙемдә ниҙер етмәгән һымаҡ тойолдо. Бер аҙҙан улар менән бөтөнләй һөйләшер һүҙем ҡалмағанын шәйләнем. Тел белмәүҙән түгел. Төркөмдә француздар, немецтар, итальяндар байтаҡ ине, шуға күрә аралашыу башлыса урыҫ телендә булды. Һәр кем үҙ иле тураһында бәйән итте. Шуға иғтибар иттем: һөйләгәндә ауыҙҙарынан төкөрөк сәселһә, күҙҙәренән осҡон осто. Күңелдәгеләрен еткерә алмаған кеүек тойолһа, береһе лә аңламаһа ла, үҙ телдәрендә әйтеп, хатта ҡысҡырып ҡуялар. Ысын мәғәнәһендә үҙ илдәренең илһөйәрҙәре ине улар. Ярышып-уҙышып үҙ төйәктәрен маҡтанылар, күренекле шәхестәре, тарихи ҡомартҡылары менән ғорурландылар, бер-береһен иғтибар менән тыңлап, ҡыҙыҡ тип иҫәпләгән урындарын блокноттарына теркәп тә барҙылар. Шул ваҡытта үҙемдең Башҡортостан тураһында бер нәмә лә белмәгәнемде аңланым, сөнки уҡығанда ил тарихына өҫтөнлөк бирелде. Ул күптән "тоҙлап" эленде инде. Бер төрөк башҡорт яҙыусылары хаҡында һорашты. Мин - ләм-мим. Бер француз боронғо ҡалаларыбыҙ хаҡында ҡыҙыҡһынды. Был хаҡта ла бер нәмә лә әйтә алманым. Ниндәй милләт кешеһе булыуыңа ҡарамаҫтан, республикаға исем биргән халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен, телен үҙең дә, балаларың да белергә тейеш, тигән принципты аңыма һеңдереп ҡайттым шулай...

Күңелде күтәренкелек биләп алды: аңлы атай-әсәйҙәр бар бит арабыҙҙа. Сит милләттән булһа ла, улына башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, ҡомартҡыларына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйған. Иң мөһиме: ҡыҙының мәктәптә өлгәшмәүенә зарланған әңгәмәсеһенә ябай ғына миҫал аша туған телде, тарихты белеү ниндәй әһәмиәткә эйә булыуын төшөндөрә алды ул.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Өфөлә 14-15 майҙа Башҡортостандың баш ҡалаһында ШОС ағзалары булған дәүләттәрҙең транспорт министрҙары кәңәшмәһендә ойошмаға ингән илдәрҙең дөйөм транспорт системаһын булдырыу мәсьәләһе тикшереләсәк. Өфөгә ШОС ағзалары булған дәүләттәрҙең министрҙары, күҙәтеүселәр һәм партнерҙар етәкселегендә 17 милли делегация һәм халыҡ-ара төбәк ойошмалары, дәүләт-ара берекмәләр етәкселәре килә.

✔ БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары менән осрашты. Осрашыуҙа билдәләнеүенсә, бөгөн республикала 69 меңдән ашыу һуғыш ветераны, 20618 тол ҡатын, 20618 тыл хеҙмәтсәне йәшәй. "Һуғыш йылдарындағы быуынға социаль ярҙам итеү беҙҙең дәүләт сәйәсәтенең алдынғы йүнәлештәренең береһе", - тине Константин Борисович.

✔ Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк штабы Instagram социаль селтәрендә республика халҡынан дауахана һәм мәктәптә бешерелгән аҙыҡтың фотоһүрәттәрен йыя. Instagram социаль селтәренә дауахана ризығы төшөрөлгән фотоны - #едабольницыРБ, мәктәптекен #едашколыРБ билдәһе менән ҡуйыу зарур. Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк штабы рәйестәше Эльвира Айыҭколова фекеренсә, "йылдан-йыл дәүләт социаль өлкәгә күпләп аҡса йүнәлтә, ә халыҡтан һорау алыуҙан күренеүенсә, ошо хеҙмәттәр менән ҡәнәғәт булыусылар аҙ".

✔ Июндә Германияның Лейпциг ҡалаһынан Силәбе өлкәһенең Лейпциг ауылына тиклем автоуҙыш ойошторола. Проекттың маршруты Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө аша үтә. Автоуҙышта ҡатнашыусы туғыҙ кеше 24 июндә Өфөгә килеп етәсәк. Шулай уҡ Мәскәүҙә, Ырымбурҙа, Силәбелә һәм башҡа ҡалаларҙа туҡтарға ниәтләйҙәр.

✔ БДАУ-ның Йәштәр һарайында үткән гала-концертта йыл һайын ойошторолған йыр бәйгеһенең еңеүселәре иғлан ителде. Сараға Бөйөк Ватан һуғышы һәм локаль һуғыштар ветерандары, ҡала йәштәре саҡырылғайны. Башҡорт дәүләт аграр университетының "Йәшлек" ансамбле "Бөйөк Еңеүҙе данлап!" республика хәрби-патриотик йырҙар конкурсында Гран-приға лайыҡ булды.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**"Российская газета" аҙналығының быйылғы 26 март һанында журналист Гөлназ Данилованың "Шайморатов генерал яҙмышы" тигән күләмле мәҡәләһен уҡып, ҙур тулҡынланыу кисерҙем. Легендар шәхесебеҙ яҙмышына ҡарата күҙҙәрем асылғандай булды, үҙем өсөн ошоға тиклем билдәһеҙ булған бик күп мәғлүмәт алдым, һоҡландым.**

# УТТА ЯНМАЙ, ҺЫУҘА БАТМАЙ...

Гөлназ Данилова 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Минлеғәле Шайморатов хаҡында режиссер Радик Ҡоҙаяров төшөргән ике сериялы яңы "Генерал" фильмы тураһында бәйән итә. М. Шайморатовтың М.В. Фрунзе исемендәге хәрби академияны тамамлаған та махсус задание менән Ҡытайҙа эшләүе, нисек итеп күренекле хәрби начальник булып китеүе, һуғыштағы ҡаһармандыҡтары һәм, ниһайәт, ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа һәләк булыуы ошоға тиклем серле билдәһеҙлек шаршауы артында ҡала килһә, Р. Ҡоҙаяров ентекле һәм тынғыһыҙ эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә тупланған архив документтары, исән ҡалған шаһиттар күрһәтмәләре нигеҙендә комдивтың героик яҙмышын ғына түгел, ул ваҡыттағы ваҡиғалар һәм айырыуса Бөйөк Ватан һуғышы тарихының ҡайһы бер билдәһеҙ биттәренә лә асыҡлыҡ индереүгә өлгәшкән.

Мәғлүм булыуынса, ваҡытында ошо ваҡиғаларҙың эҙен юллай барып, ҡиммәтле мәғлүмәттәр туплай алған урындағы тележурналиска ҡайһы бер юғарылағы чиновниктар был турала онотторға кәңәш итә, ләкин легендар шәхес халыҡ күңелендә йыр булып йәшәне, исеме бары бер ҡасан да юғалманы, хәтерҙәрҙән юйылманы, сөнки батырҙарыбыҙ беҙҙең, ысынлап та, утта ла янмай, һыуҙа ла батмай, таш зиндандар эсендә лә серемәй! Уларҙың исемен баҫырмалап, тыйып ҡына халыҡ күңеленән сығарып ташлап булмай. Тыуған иле, ере, халҡы өсөн йәндәрен фиҙа ҡылған батырҙар быуаттарҙан һуң да хатта үлемһеҙ йыр булып тыуған иленә ҡайта... Был фильмдан һуң да генерал М. Шайморатовҡа Советтар Союзы Геройы исеме биреү һаман шулай тотҡарланып ҡалырмы икән, тигән һорау борсой. Йәмәғәтселек инде нисә тапҡыр был теманы күтәреп ҡарай, әммә халыҡ талабы һаңға һуғылмай, уның юлына һәр саҡ кәҙгә күренмәҫ ҡаршылыҡ көртә булып ята... Фильм авторы ла был хаҡта йөшермәй тураһын әйтә: 1970 йылда уҡ әле генерал Шайморатовтың һәләк булыуы хаҡындағы хәҡиҡәт башҡорт журналисы һәм яҙыусы Мансаф Ғиләжевҡа билдәле булыуға ҡарамаҫтан, уға юғары даирәләр тарафынан был мәғлүмәттәр хаҡында өндәшмәскә ҡушыла.

Әйткәндәй, билдәле журналист-эҙәрмән, яҙыусы Рәүеф Насиров оҙаҡ йылдар буйы ныҡышмалы эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә Александр Матросовтың Шакирйән Мөхәмәтйәнов икәнлеген документтар һәм шаһиттар нигеҙендә иҫбатлап сығыуына ҡарамаҫтан, хәҡиҡәт һаман булһа рәсми танылыу ала алмай. Билдәле бер даирәләрҙә был фактҡа "штык менән" ҡаршы торалар һәм ишетергә лә теләмәйҙәр, бик булмаһа, көлкөгә һабыштыралар: шундай ҡаһарман ирҙең башҡорт булаһы бармы, йәнәһе... Былай уйлаусылар үҙҙәренең тарих өлкәһендә наҙанлығын ғына күрһәтә. Ә бит башҡорт халҡының шанлы һуғышсан тарихында ниндәй генә ҡаһарманлыҡ өлгөләре юҡ! Иле, халҡы өсөн аңлы рәүештә һәләкәткә барған батырҙарыбыҙҙың исемдәрен алтын хәрефтәр менән ташҡа уйырлыҡ! Шакирйән Мөхәмәтйәновтың үлемһеҙ батырлығын ҡабатлаған Советтар Союзы Геройы Минлеғәле Ғәбәйҙуллин, Илеш ҡыҙы Рәхимә Булатовалар ҙа бит беҙҙең милләттәштәр. Күренекле шәхестәребеҙ, геройҙарыбыҙ исемен ана шулай Рәсәй, донъя кимәлено күтәреүсе режиссер, яҙыусы, рәссам, тарихсыларыбыҙ күберәк булһын ине лә бит...

Радик Ҡоҙаяров төрлө йылдарҙа Даян Мурзин, Шарль де Голль, Евгений Примаков, Рудольф Нуриев, Кәрим Хәкимов һәм башҡа күренекле шәхестәр тураһында Үҙәк телевидениенан күрһәтелгән тиҫтәләгән фильмдары менән билдәлелек яуланы. Рәхмәт уға! Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын байрам иткән көндәрҙә "Генерал" фильмы ла киң прокатта йә һис юғы Үҙәк һәм урындағы телевидение аша булһа ла Башҡортостан халҡы иғтибарына еткерелер, тип ышанғы килә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**



ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ЕҢЕҮ МАНДАТЫ

*(Дон фронты, 1943 йылдың 14 ғинуары)*

Аҡ ҡар өҫтө.
Бөтә яугирҙарҙың
Ҡараштары дошман яғында.
Енербеҙме бөгөн, әллә инде
Артҡа сигербеҙме тағын да?
Еребеҙҙе дошман тапауына
Йөрәктәрҙә асыу ҡайнаны.
Нәфрәт тойғоһонан гәйрәтләнеп,
Еңеү юлын бөгөн һайланыҡ.
Көслө һөжүм. Ура! Ватан өсөн!
Беҙҙең сафтар алға ташланды.
Тәүге тапҡыр артҡа сигенмәнек,
Беҙ үҙебеҙ ҡыуҙыҡ дошманды.
Яраһынан ҡара ҡаны аға,
Ергә ауҙы дошман һалдаты.
Бөгөнгө көн, эйе, беҙ, яугирҙар,
Ҡулға алдыҡ Еңеү мандатын.
Баш ҡалабыҙ бөгөн беҙҙе ҡотлай,
Күңел күтәренке, беҙ еңдек!
Ныҡ маһайған дошман ғәскәрҙәрен
Боғаҙынан быуып үлтерҙек.
Сафтарыбыҙ көслө, беҙ берҙәмбеҙ,
Ҡалҡан булдыҡ Тыуған ил өсөн,
Илгә биргән антты үтәү өсөн
Совет халҡы һалды бар көсөн.
Һуңғы һулышҡаса көрәшербеҙ,
Юлдар ауыр, ҡанлы булһа ла.
Яу яланы... Еңеү шатлығынан
Ҙур шатлыҡ юҡ икән донъяла.

**Уйылдан ШӘРИПОВ,**
**Бөйөк Ватан һуғышы ветераны,**
**Ғафури районы Красноусол ҡасабаһы.**

## ВЕТЕРАНДАР

Урам буйлап килә бер ветеран,
Күкрәгендә орден-миҙалдар.
Сағылалыр уның күҙ алдында
Ғүмерендә ашмаҫ хыялдар...

Йөҙө уйсан. Хәтерендә уның
Утлы йылдар микән, еңеүме?..
Заманына ашмаҫ хыялдарҙы
Һаҡлап йәшәү уға еңелме?..

Ниндәй моңдар сиртә икән уның
Күңелендә нескә ҡылдарҙы?
"Зәңгәр яулыҡ", моңло "Катюша"мы
Хәтерләтә утлы йылдарҙы?

Тамуҡ юлын үткән утлы йөрәк
Аҡрын ғына үтте янымдан.
Ялҡындары, йөрәгемә үтеп,
Йәшнәп ҡалды минең аңымда...

Ветерандар, йөрәктәрҙә һеҙгә
Рәхмәтте беҙ мәңге һаҡларбыҙ!
Киләсәккә беҙ ҙә, һеҙҙең кеүек,
Хыял, Өмөт менән атларбыҙ.

**Зөфәр ВӘЛИТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Руслан Сөләймәнов "Толпар" йәштәр командаһының өлкән тренеры итеп тәғәйенләнде. Был вазифала Руслан Сөләймәнов ике миҙгел дауамында "йәш юлаевсылар"ҙы етәкләгән Венер Сафинды алмаштырҙы. 2012-2013 йылдарҙа Руслан Сөләймәнов етәкләгән "Торос" клубы ике тапҡыр Братина кубогын яуланы.

✔Салауат башҡорт дәүләт драма театры "Мең һулыш - бер тауыш" VIII халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә ҡатнашты. Фестиваль Төркиәнең тарихи һәм мәҙәни үҙәгендә - Конья ҡалаһында уҙҙы. Башҡортостан театрынан тыш, Рәсәйҙән Дағстан Республикаһының ноғай дәүләт драма театры, "Читиген" хакас драма һәм этник музыка театры ҡатнашты. Зөһрә Бураҡаеваның "Коркут атаның һуңғы йыры" спектакле ҙур уңыш менән үтте. Уны театрҙың баш режиссеры Зиннур Сөләймәнов ҡуйған.

✔Байрам көндәрендә Өфөләге күп кенә магазиндарҙа, дөйөм туҡланыу һәм көнкүреш хеҙмәтләндереү предприятиеларында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, уларға тиңләштерелгән кешеләр өсөн ҡайһы бер тауарҙарға һәм хеҙмәттәргә ташламалар яһала. Байрам акцияһында ҡатнашыусы һәр предприятиеның ишегенә махсус плакат эленгән. Бынан тыш, 3 майҙан 12-нә тиклем ветерандар йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү хоҡуғына эйә.

✔29-30 майҙа Янауылда Фәтих Ихсанов исемендәге "Моңға бай гармун байрамы" республика конкурсы ойошторола. Бәйгелә солистар, тальянда, гармунда уйнаусы ансамблдәр һәм милли музыка ҡоралдарын эшләүсе оҫталар ҡатнаша. Конкурс ике йәш категорияһы (17 йәшкә тиклем һәм 17 йәштән өлкәнерәк) буйынса үткәрелә.

✔Белгород өлкәһе (уртаса балл - 40,86), Башҡортостан (38,54) һәм Ленинград өлкәһе (37,21) торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағында һөҙөмтәле идара итеүсе ойошмаларҙың һаны буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы өс субъекты исемләгенә инде.

✔Рәсәйҙең Оборона министрлығы Бөйөк Ватан һуғышы геройҙарының яҙмышы тураһында "Халыҡ хәтере" тип аталған интернет-портал асты. Берҙәм мәғлүмәттәр базаһында шулай уҡ Беренсе һәм Икенсе донъя һуғыштарындағы юғалтыуҙар һәм һалдат-офицерҙарҙы бүләкләүҙәр тураһында документтар тупланған.

**"Башинформ"дан.**

ИҒТИБАР!

# БАЙРАМҺЫҘ ҠАЛМАҒЫҘ!

**Республиканың баш ҡалаһында Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған бихисап саралар планлаштырылған. Улар менән журналистарҙы Өфө ҡала округы башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов таныштырҙы.**

Сынтимер Биктимер улы билдәләүенсә, байрам көндәрендә баш ҡалала тантаналы митингтар, сәскә һалыу, мәҙәни, спорт, социаль-хәйриә, һуғыш һәм тыл ветерандарын тәбрикләү саралары үтте һәм үтәсәк.

Еңеүҙең 70 йыллығына арналған күп саралар 8 майҙа башланды. Иртәнге сәғәт 10-да Республика музейында Республика Башлығы Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына юбилей миҙалдары тапшырҙы. Еңеү паркында Мәңгелек утҡа сәскәләр һалыу тантанаһы булды, "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Еңеү көнөнә арналған тантаналы сара үтте.

Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған төп саралар 9 майҙа Ленин паркында үтәсәк. Иртәнге сәғәт 10-дан 11-гә тиклем Октябрь проспекты буйлап (ҡала округы хакимиәте бинаһы янында) хәрби частарҙың, хәрбиләштерелгән ойошмаларҙың, көс структураларының парады буласаҡ.

Ул тамамланғас, "Үлемһеҙ полк" Бөтә Рәсәй граждан-патриотик акцияһы планлаштырылған. Ҡала урамдары буйлап һуғышта һәм һуғыштан һуң үлеп ҡалған ветерандарҙың фотолары ҡуйылған транспаранттар менән 5 мең тирәһе кеше үтәсәк.

9 майҙа "Еңеүселәр маршы"на старт бирeләсәк. Александр Матросов (Шакирйән Мөхәмәтйәнов) һәйкәле алдынан Пушкин, Ленин урамдары буйлап Якутов паркына тиклем Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡулланылышта булған ретро-техника, хәрби форма кейгән һәм ҡорал макеттары тотҡан ҡатнашыусылар үтәсәк. Якутов исемендәге паркта ветерандар менән осрашыу буласаҡ.

Ошо уҡ көндә "Динамо" стадионында велоспорт буйынса 2000 йылғы һәм унан бәләкәйерәк үҫмерҙәр араһында ҡала беренселеге үтәсәк. Һуңғараҡ, сәғәт 12-лә, Еңеүҙең 70 йыллығына арналған Ҡала хакимиәте һәм "Молодежная газета" гәзите призына еңел атлетика буйынса 67-се эстафета башлана.

9 майҙа Рус дәүләт драма театры алдындағы майҙансыҡта сәғәт 12-нән сәғәт 16-ға тиклем баш ҡаланың үҙешмәкәр коллективтары, Өфөлә үткәрелгән "Еңеү салюты" конкурсы лауреаттары һәм дипломанттары сығыш яһаясаҡ. Концерт программаһын "Тыныслыҡ йырын йәштәр башҡара" тип аталған патриотик йырҙар асыҡ ҡала конкурсы ҡатнашыусыларының сығыштары дауам итәсәк. Ә һуңынан баш ҡаланың профессионал солистарының һәм коллективтарының концерты көтөлә. Байрам саралары киске сәғәт 11-ҙә Ленин исемендәге майҙанда фейерверк менән тамамланасаҡ.

Бынан тыш, баш ҡаланың һәр районында байрам саралары ҡаралған. Сауҙа һәм дөйөм туҡланыу предприятиелары бөтә майҙансыҡтарҙа ла халыҡты хеҙмәтләндерәсәк. Улар 7 майҙан 9 майға тиклем Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм уларға тиңләштерелгән кешеләр өсөн "Хәтер" тип аталған акция үткәрәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты, "112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы" музейы тарафынан ойошторолған хәтер кисәһе Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналды һәм унда баш ҡаланың юғары һәм урта профессиональ белем биреү уҡыу йорттары студенттары, инновацион урта дөйөм белем биреү учреждениелары уҡыусылары йыйылды.**

# ХӘТЕР КИСӘҺЕ...

## Башҡорт атлыларына арналды

Йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү маҡсатын күҙҙә тотҡан сарала 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының ойошторолоу һәм данлы һуғыш юлы тарихы тураһында һүҙ барҙы. Һуғыштың иң хәл иткес бер мәлендә, фашистар илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүгә яҡынлаған осорҙа ойоштороло башлай был дивизия. Унда Башҡортостандан иң ҡыйыу, физик яҡтан таҙа, шул уҡ ваҡытта белемле егеттәр һайлап алына. Дивизияны аттар һәм башҡа һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеүҙә республикабыҙҙың барлыҡ колхоз-совхоздары ҡатнаша. Дивизия данлы һуғыш юлы үтә. Уның 78 яугирына Советтар Союзы Геройы исеме бирелә, 5 яугир - иң ҙур наградаларҙың береһе булған Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ була. Бөйөк Ватан һуғышы тарихында шул тиклем геройҙар биргән берҙән-бер хәрби ойошма була 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы. Уның командиры генерал Миңлеғәли Шайморатов 1943 йылда яу яланында һәләк була. Сарала ҡатнашыусылар халыҡ тарафынан Бөйөк Ватан һуғышы тарихында тәрән эҙ ҡалдырған дивизия командирына Советтар Союзы Геройы исеме биреүҙе талап итеп, ярты миллиондан ашыу ҡултамғалар йыйыуға ҡарамаҫтан, һаман да был һорауҙың тормошҡа ашырылмауына үкенес белдерҙе.

Миңгә яҡын студент һәм уҡыусы йыйылған сарала Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары Ғәбделхәй Зарипов, Сабир Йыһаншин ҡатнашты. Сабир Шәйәхмәт улы бик матур һәм мауыҡтырғыс итеп һуғыш хәтирәләре менән уртаҡлашты. Ветерандарҙы һәм кисәлә ҡатнашыусыларҙы БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы депутаттары - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, уның беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов, Башҡорт дәүләт аграр университеты ректоры Илдар Ғәбитов ҡотланы. Йырсылар Юнир Һағынбаев, Харис Шәрипов, Вилдан Фәйзуллин, Илнур Миһманов, һәүәҫкәр композитор Фәниә Дауытова, 103-сө мәктәп уҡыусыһы Камилла Мөҙәрисова кисәне моңло йырҙары менән биҙәне. Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев М. Шайморатов ролендә инеп, уның һуңғы алыш алдынан монологын уҡып, был легендар шәхестең батыр йөрәкле һуғышсы-генерал ғына түгел, ә күңелендә халҡына, иленә оло һөйөү, яугирҙары ғүмере тураһында тәрән борсолоу йөрөткән бөйөк шәхес итеп тә күҙаллаңдерҙе. Кисәне ойоштороусыларҙың береһе - Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттары бигерәк тә әүҙем булды: "Шоңҡар" вокаль ансамбле, ҡурайсылар төркөмө, "Шатлыҡ" бейеү ансамбле сығыштары тамаша ҡылыусыларға уҡыу йортонон, унда уҡыған йәштәрҙең илһөйәрлек рухын еткерҙе.

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙОРТТАРҒА НУР ӨҪТӘГӘНДӘЙ



*Һүрәттә Муса Гәрәев.*

**Рәссам-граффитист Олег Кайбышев Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына баш ҡала халҡына яңы бүләктәр әҙерләне.**

Өфөнөң Хоҙайбирҙин урамындағы 4-се йорттоң стенаһын совет хәрби летчигы, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, милли батырыбыҙ Муса Гәрәевтың граффити-портреты биҙәйәсәк. Был йортта ҡасандыр герой үҙе йәшәгән. Бында ла бер нисә эскиз араһынан Олег Кайбышевтың һүрәте һайлап алынған. Йәш, ихлас йылмайып торған Муса Гәрәевтың образын ИЛ-2 штурмлаусы самолеты һәм хәҙерге заман самолеттары тулыландыра, улар һауала 70 һанын һүрәтләйәсәк.

Ә Һупайлы бисҭәһендә Жуков урамының икенсе йортонда Советтар Союзы маршалы, дүрт тапҡыр Советтар Союзы Геройы Георгий Жуковтың портреты барлыҡҡа килде. Рәссам Олег Кайбышевтың ижады Һупайлы халҡына яҡшы таныш, Юрий Гагариндың һүрәте төшөрөлгән йорт хәҙер бисҭәнең иң матур урындарынан иҫәпләнә.

Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең Торлаҡ хужалығы идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, граффити стилендәге портреттар ҡала халҡында байрам кәйефе булдырып, яҡташтарыбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғолары ла уятасаҡ. Бөгөн баш ҡаланың төрлө райондарында 30-ҙан ашыу граффити стилендәге һүрәт бар. Уларҙың араһынан иң уңышлылары тип Инорстағы әсә менән бала һүрәте, Һупайлылағы пианино янындағы ҡатын һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һүрәте, Чернышевский урамындағы Михаил Нестеров картинаһының күсермәһе, Ленин урамындағы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Алексей Королевскийҙың "Өфө. Дуҫлыҡ монументы" һүрәте иҫәпләнә. Был һүрәттәр ысынлап та ҡаланың һоро төҫөнә айырым бер нур өҫтәгәндәй.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ 4-5 июндә Октябрьскийҙа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған республика Ҡурай байрамы үтә. Бәйгелә ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы 25 майға тиклем 450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева урамы, 17/2 адресы буйынса Республика халыҡ ижады үҙәгенә ебәрергә кәрәк. Телефон/факс: (347) 289-65-50. Электрон почта: gukrcnt@mail.ru.

✓ Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында балыҡсылыҡ кәсебе участкалары менән файҙаланыусылар өсөн квоталар билдәләнәсәк материалдар буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үтте. Йәмәғәт тыңлауҙары һөҙөмтәләре буйынса киләһе йылда 283 тонна балыҡ, шул иҫәптән 11 тонна умыртҡаһыҙҙар тоторға мөмкин.

✓ Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы 14-тән 12,5 процентҡа тиклем кәметеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Был хаҡта Үҙәк банкының сайтында хәбәр ителә. Үҙәк банк йыллыҡ инфляцияның нығыныуын билдәләй. Өҫтәүенә, ҡулланыусылар хаҡтары үҫеше көтөлгәнгә ҡарағанда тиҙерәк туҡтаясаҡ. Бер йылдан (2016 йылдың апрелендә 2015 йылдың апреленә ҡарата) йыллыҡ инфляция һигеҙ проценттан кәмерәк кимәлгә һәм 2017 йылда билдәләнгән кимәлгә (дүрт процентҡа) етәсәк.

✓ Быйылғы эпидемиологик миҙгелдә медицина ойошмаларына талпан ҡаҙалған 219 кеше мөрәжәғәт иткән. Талпандың зарарлымы-түгелме икәнен Өфө ҡалаһы, Шәфиев урамы, 7 адресы буйынса урынлашҡан Гигиена һәм эпидемиология үҙәге лабораторияһында йәки уның Күмертау, Нефтекама, Бөрө, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Октябрьский, Салауат ҡалаларындағы филиалдарында тикшертергә мөмкин. Өфөләге лаборатория көн һайын иртәнге сәғәт 9-ҙан көндөҙгө 4-кә тиклем, 1 майҙан ял һәм байрам көндәрендә лә эшләй. Белешмә өсөн телефон: (347) 237-58-40.

✓ Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте республиканың ҡала һәм райондарында китап күргәҙмә-сауҙаһы ойоштора. Күргәҙмә 13 һәм 14 майҙа Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында, 15 майҙа - Әбйәлил районы Асҡар ауылының Үҙәк китапханаһында, 16 майҙа - Баймаҡ районы Темәс ауылының үҙәк майҙанында, 17 майҙа Баймаҡ ҡалаһының Үҙәк баҙарында ойошторола.

АФАРИН!

# МӘСКӘҮ СТУДЕНТТАРЫ...

## милли көрәштә лә һынатманы

**Ошо көндәрҙә Мәскәү ҡалаһында генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов иҫтәлегенә көрәш буйынса Мәскәү турниры үтте. Орджоникидзе исемендәге Рәсәй дәүләт геология-разведкалау университетының спорт залында егермәнән ашыу егет таһыллыҡҡа көс һынашты. Сараны "Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы" ойошторҙо.**

Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған турнирҙы Рәсәй Федерацияһы Президенты Аппаратының Эске сәйәсәт буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Радий Хәбиров асты. "Көрәш - үҙенең традициялары булған үҙенсәлекле спорт төрө. Мәскәүҙә быҙндай турнир үткәреп, беҙ милли көрәштең быуаттар буйына формалашҡан йолаларын да һаҡлайбыҙ, уны үҫтерәбеҙ ҙә. Был сара юҡҡа ғына легендар командир Миңлеғәле Шайморатовҡа арналмай. Билдәле булыуынса, генерал Шайморатов Украинаны азат иткәндә һәләк була. Бөгөн илдә урынлашҡан геосәйәси хәлдәрҙә һәм Еңеүҙең 70 йыллығын байрам иткәндә Мәскәүҙә, илебеҙҙең баш ҡалаһында быҙндай турнир үткәреү бигерәк тә тәрән мәғәнәгә эйә", - тине Радий Хәбиров.

Тантаналы өлөштән һуң чемпион исеменә ярыш башланды. Мәскәү вуздарында белем алыусы Башҡортостан йәштәре араһынан ине был спортсылар. Өс ауырлыҡ категорияһында урындар түбәндәгесә билдәләнде: 75 килограмдан юғары ауырлыҡта 1-се урын - Салауат Йосопов, 2-се урын - Артур Нәбиуллин, 3-сө урын - Илназ Вәлиуллин; 75 килограмға тиклемге ауырлыҡта 1-се урын - Азамат Юлбирҙин, 2-се урын - Тимур Солтанов, 3-сө урын - Илгиз Абдуллин; 65 килограмға тиклемге ауырлыҡта 1-се урын - Рәфис Шаһиев, 2-се урын - Ринат Мусин, 3-сө урын - Ислам Минлебаев. Һәр ауырлыҡ категорияһында 1-се урын яулаусыларға спорт мастерлығына кандидат исеме, 2-се урын өсөн 1-се спорт рәзряды бирелде. Еңеүселәрҙең барыһына ла миҙал, маҡтау ҡағыҙҙары, аҡсалата бүләктәр тапшырылды. Турнирҙың иң яҡшы көрәшсеһе тип Салауат Йосопов танылды.

Турнирҙың ҡунаҡтары араһында РФ Дәүләт Думаһы депутаттары Марсель Йосопов, Рөстәм Ишмөхәмәтов, Рафаэль Мәрҙәншин, Балаш Балашов (Дағстан), Фәтих Сибғәтуллин (Татарстан), Бөтөн донъя башҡорттары королтайы Башҡарма комитеты рәйесенең йәмәғәт башлангысындағы урынбаҫары, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Рәсәйҙең Хәрби-Һауа Көстәре полковнигы, Рәсәй Геройы Рафиҡ Ихсанов, Мәскәү өлкәһе Истра ҡалаһы башлығының беренсе урынбаҫары Александр Старшинин, билдәле киноартист Павел Майков булды.

Ойоштороу комитеты етәксеһе Азат Бадранов әйтеүенсә, был турнирҙы йыл һайын ойоштороу планлаштырыла. Уҙ сиратында, был сара тап ошо уҡыу йортонда көрәш секцияһы асыу өсөн яҡшы этәргес булды ла инде.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Ҡадир ҒӘЙЕТБАЕВ, М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт химик технологиялар университеты студенты, турнирҙы ойоштороусыларҙың береһе:** Милли көрәш менән Сибайҙа мәктәптә уҡыған сағымда уҡ шөғөлләнә инем. Мәскәүгә уҡырға килгәс, милли көрәш секциялары булмағас, был шөғөлдө дауам итә алманым. Аллаға шөкөр, "Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары төбәк-ара ассоциацияһы" етәксеһе Азат Бадранов беҙҙең милли көрәш менән шөғөлләнгән егеттәрҙең теләген хуплап ҡаршы алды һәм бына ошо беренсе турнирҙы үткәреүгә өлгәштек. Бынан һуң шулай уҡ ассоциация ярҙамында көрәш секцияһын үҙебеҙ ойоштораса ҡбыҙ. Турнир ҙа йыл һайын үткәреләсәк, тип һөйләштек. Иң ҡыуандырғаны - әлеге бәйге бер ниндәй имгәнеүҙәрһеҙ үтте. Быйыл, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, урын яулай алманым, минең менән көрәшкә сығыусылар бик көслө булды. Киләһе йылға нығыраҡ әҙерләнәсәкмен.

**Салауат ЙОСОПОВ, милли көрәш буйынса РФ-ның спорт мастеры, ике тапҡыр - Рәсәй Федерацияһы, ике тапҡыр - Урал Кубогы чемпионы, күп тапҡырҙар республика чемпионы. Әлеге көндә РФ Ҡораллы көстәрендә хәрби хеҙмәтен үтәй:** Көрәш минең өсөн күптән йәшәү рәүешенә әйләнгән, унын менән бала саҡтан шөғөлләндем. Мәскәүҙә башҡорт йәштәре араһында милли көрәш буйынса Бөтә Рәсәй турниры үткәреләсәген белгәс, шундуҡ ғариза ебәрҙем. Бәйге юғары кимәлдә үтте, унда айырыуса яҡташтарыбыҙ - Рәсәй Федерацияһы Президенты Аппаратының Эске сәйәсәт буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Радий Хәбиров, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары ҡатнашыуы ҡыуандырҙы. 75 килограмдан юғары ауырлыҡ категорияһында 11 дәғүәсемде еңеп, 1-се урын яуланым. Бынан тыш, ҡалған ике ауырлыҡ категорияһында ла элекке ғариповсылар (Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты) - Рәфис Шаһиев менән Азамат Юлбирҙиндың беренселекте алыуы ҡыуандырҙы.

**Фатима ЯНБАЕВА.**



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СИТ ИЛ ПАСПОРТЫНА...

**Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса Федераль миграция хеҙмәте ошо йылдың өс айы эсендә граждандарға 20 875 сит ил паспорты тултырып тапшырҙы. Шуларҙың 13 661-е - яңы быуын биометрик паспорт булһа, 7 214 кеше 5 йылға иҫәпләнгән иҫке өлгөләге паспорт алды. Сағыштырыу өсөн: былтырғы йылдың ошо уҡ осорона бөтәһе 39 576 документ тултырылған һәм шуның яртыһын яңы өлгөләге сит ил паспорттары тәшкил иткән.**

2015 йылдың 1 апреленә Берҙәм дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталы аша 1221 - яңы һәм 427 иҫке өлгөләге паспорттар тултырылды. Иҫке өлгөләге сит ил паспорты алыу өсөн документтарҙы "бер тәҙрә"усулы менән эшләүсе Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеүсе күп ғәмәлле үҙәк (МФЦ) ҡарамағына тапшырырға ла мөмкин. Был Үҙәктән хәбәр итеүҙәренсә, йыл башынан уның филиалдары ошондай паспорт юллаусыларҙан 2 057 ғариза ҡабул иткән.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: Рәсәй Феедерацияһының 2014 йылдың 21 июленәге Федераль законына ярашлы, РФ Һалым кодексына индерелгән үҙгәрештәрҙән һуң Рәсәй Федерацияһына инеү һәм унан ситкә сығыу менән бәйле ғәмәлдәр өсөн дәүләт пошлинаһы күләмдәре артты.

1. Рәсәй Федерацияһынан ситтә Рәсәй Федерацияһы гражданы шәхесен танытҡлаусы паспорт (5 йылға) өсөн - 2 000 һум;
2. Рәсәй Федерацияһынан ситтә РФ гражданы шәхесен танытҡлаусы электрон мәғлүмәтле паспорт (10 йылға) өсөн - 3 500 һум;
3. Рәсәй Федерацияһынан ситтә РФ гражданы шәхесен танытҡлаусы 14 йәшкә тиклемге РФ гражданына бирелеүсе паспорт (5 йылға) өсөн - 1 000 һум;
4. Рәсәй Федерацияһынан ситтә РФ гражданы шәхесен танытҡлаусы 14 йәшкә тиклемге РФ гражданына бирелеүсе электрон мәғлүмәтле паспорт (10 йылға) өсөн - 1 500 һум;
5. Рәсәй Федерацияһынан ситкә сығыусы РФ гражданы шәхесен танытҡлаусы паспортҡа төҙәтмә индереү өсөн - 500 һум.

# ТАҒЫ ХАҠ АРТА

**2015 йылдың 1 июленән Башҡортостанда утҡа, газға, йылылыҡҡа һәм һыуға тариф арта.**

2015 йылдың 1 ғинуарынан тәбиғи газдың мең кубометры - 3030 һум, ә 1 июлдән 3257 һум буласаҡ. Беренсе ярты йыллыҡта Башҡортостанда йәшәүселәр газдың кубометры өсөн 4,5-6 һум түләй, 1 июлдән тариф 7,5 процентҡа арта. Быйыл электр энергияһына тариф 8,9 процентҡа арта (2014 йылда - 7,2 процентҡа). 1 июлдән бер ставкалы тарифтың үҫеше 7,5 процент тәшкил итәсәк.

1 ғинуарҙан республика халҡы һыуҙың кубометры өсөн 13 һум 53 тин түләһә, 1 июлдән 16 процентҡа күберәк түләргә тура киләсәк. Тәүге ярты йыллыҡта һыу булеү - 12 һум 99 тин, 1 июлдән хаҡ 19,6 процентҡа күтәрелә.

Ирина Васимирская билдәләүенсә, тарифтарҙы формалаштырғанда Дәүләт комитеты иҡтисадтың үҫешенә йоғонто яһаған инфраструктура компанияларының мәнфәғәттәрен иҫәпкә алырға, инвестициялар йәлеп итеүҙе күҙ уңында тоторға тейеш.

- Тарифтарҙың күләменә селтәрҙәрҙең оҙонлоғо, уларҙың тузыу кимәле лә йоғонто яһай, - тине Ирина Васимирская.

Хәҙерге ваҡытта республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты 14 йүнәлеш буйынса 400-ҙән ашыу предприятиены көйләй. 2015 йылға тариф буйынса 850 ҡарар ҡабул ителгән. Унда газға хаҡтар, йылылыҡ һәм электр энергияһына, һыу менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеүгә тарифтар, транспорт хеҙмәттәре мөһим урын биләй.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йоҡоһоҙлоҡтан

❖ Тигеҙ күләмдә бойҙай һәм арыш икмәген ваҡлап, бер нисә ҡалаҡ тоҙло ҡыяр һыуын, ваҡлап туралған ярты тоҙло ҡыяр һәм 1 ҡалаҡ әсегән һөт ҡушып, иртәлекисле 10-15 минутҡа маңлайға ҡуйырға ла, аҙаҡтан йылы һыу менән йыуып төшөрөргә.

## Көҙән йыйырыу

❖ Аяҡ өҫтө оҙаҡ эшләүселәрҙә йыш осрай. Һыу ингәндә лә һаҡ булырға кәрәк, шуға үҙең менән һәр ваҡыт булавка йөрөтөү яҡшы. Көҙән йыйыра башлау менән шул урынға булавканың осо менән сәнсергә кәрәк, ул һине бәләнән ҡотҡарасаҡ. Был сирҙе булдырмау өсөн массаж яһарға, тәнде йылытыу кәрәк.

## Йәрәхәт төҙәлмәһә...

❖ Сөй йәки башҡа нәмәгә тейеп йәрәхәтләнһәң, юл япрағын иҙеп, яраға ябаһың. Был ҡатнашма эренле яраларҙы ла төҙәтә.

❖ Йәрәхәтте йыуып, яңы ғына яһалған эремсекте ябырға һәм төнгөлөккә бәйләп ҡуйырға. Йәрәхәт 1-2 көндән бөтәшә.

## Быуындар һыҙлағанда

❖ Термосҡа 2-шәр ҡалаҡ ҡайын япрағы, бәпкә үләне, гөлйемеш япрағы һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнап торған һыу ҡойорға, бер тәүлек төнәтеп, һөҙөргә, 2 ҡалаҡ тоҙ ҡушырға. Таҙа һарыҡ йөнөн йәки иҫке ойоҡбашты шул төнәтмәлә һыулап, һыҡмайынса киптерергә һәм ауыртҡан быуынға ҡуйып, бинт менән бәйләп ҡуйырға. Тәүлегенә 1-2 тапҡыр алыштырып бәйләп торорға.

❖ Кизе-мамыҡ туҡыманан моҡсай тегеп, ҡайын япрағы тултырып, ауыртҡан урынға 1,5-2 сәғәткә бәйләп ҡуйыу ҙа шифалы. Дауаланыу курсы - 2 ай.

## Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымын анар емеше (гранат) көйләй. Ҡан баҫымын нормаға килтерә һәм яман шеш күҙәнәктәренең бүленеүен әкренәйтә торған эсемлекте әҙерләү өсөн 2 балғалаҡ киптерелгән анар орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 20 минут төнәтергә һәм өс өлөшкә бүлеп, көнө буйы эсеп бөтөргә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАРҒА...
## ҡазаны иҫкәртә

**"Ҡарға - Хоҙай ҡошо", тиҙәр. Ул Хоҙай менән кешеләр араһында бәйләнеш булдырып йөрөй, тигән ышаныу бөгөн дә һаҡланып ҡалған. Шуға ла ҡарға кешенең, уның ғаиләһененең яҙмышын да билдәләй ала, тиҙәр.**

Ышаныуҙар буйынса, ҡарға көньяҡҡа ҡарап ҡысҡырһа, изге хәбәргә, төньяҡҡа ҡарап ҡысҡырһа - яманға. Әгәр ҙә ҡарға кешенең юлын ҡыйып осһа, йорт янында ҡысҡырһа, берәй төрлө ҡазаны иҫкәртә, тигәндәр. Шуға ла борон башҡорттар, бәләнән хәүефләнеп, ҡарға ҡарҡылдаған ерҙә төнгөлөккә ҡунырға туҡтамағандар. Йорт тирәһендә ҡарға ҡысҡырһа: "Изге ҡош, ҡысҡырыуың яҡшыға булһын, мә һиңә бал менән май!" тип, йәки: "Хоҙай ҡошо, ҡиблаға ҡарай ос, изге хәбәрҙәр алып кил", тигәндәр. Бөрйән, Яңауыл райондарында ҡарға ҡарҡылдаған саҡта: "Халыҡҡа, илгә бәрәкәт алып кил", - тип теләйҙәр. "Ҡарға, ҡарға, тамағыңа таш торһон", - тип әйткәндәрен дә ишетергә тура килде. Йәғни, башҡорттар төрлө һамаҡтар, хатта ҡурҡытыуҙар менән ҡарғаның мәрхәмәтенә өлгәшергә тырышҡан.

Ҡарға ҡысҡырыуына ыңғай ҡараштар ҙа бар - ҡунаҡ килә, тиҙәр. Әгәр ҙә ҡарғалар яҙын килгәс тә юлға ултырһа - уңышҡа, ағас башына ултырһа - йыл туҡлыҡлы килә. Яңауыл башҡорттары ҡарғаны айырыуса изгеләштерә, был төбәктә: "Тышың ҡара булһа ла, эсең аҡ!" , - тип өндәшәләр ҡарғаға.

Борондан ҡарға ояһын туҙҙырырға, уларға таш ташларға, ҡарға итен ашарға ярамаған. Был ҙур гонаһ. Әлшәй районының Баязит ауылында яҙып алынған легендала һөйләнеүенсә, ҡарға Мөхәммәт бәйғәмбәргә юл күрһәткән. Ҡарғаны үлтергән кешенең үҙенә генә түгел, бөтөн зат-ырыуына яза төшөүө бар. Шул уҡ ваҡытта был тыйыу ҡара ҡарғаларға ҡағылмаған.

Башҡорт халыҡ ижады өлгөләрендә ҡарға Хоҙай ярҙамсыһы, Нух бәйғәмбәрҙең йомошсоһо, Мөхәммәт бәйғәмбәргә юл күрһәтеүсе, ерҙе барлыҡҡа килтереүсе булараҡ сығыш яһай. "Туфан ҡалҡыу" легендаһында туфан һыуы ҡалҡҡас, Нух бәйғәмбәр үҙенең көймәһенә башҡа йәнлектәр менән бергә, ҡарғаны ла ала. Бер көндө Нух ярһыҙ океанда ҡоро ер эҙләргә ҡушып, ҡарғаны осороп ебәрә. Оҙаҡ оса ҡарға, ҡоро ер ҙә таба, әммә унда ятҡан үләкһәне соҡорға тотоноп, бар донъяһын, шул иҫәптән, Нух бәйғәмбәрҙе лә онота. Был ҡылығы өсөн Нух уны ҡарғай. Икенсе бер космогоник мифта һөйләнелеүенсә, Ут эйәһе менән Һыу эйәһе дошманлашып йәшәгән. Ҡарға уларҙы яраштырырға тырышһа ла, бер нәмә лә килеп сыҡмаған. Быға көйгән ҡарға уларҙың өҫтөнә хәжәтен башҡарған һәм шул рәүешле ҡаты ер барлыҡҡа килгән.

Башҡорттар ҡарғаны оҙаҡ йәшәр йән эйәһе тип белә. Бер ваҡыт ҡарға Нух бәйғәмбәрҙең һауытынан тере һыу эсә һәм бының өсөн бәйғәмбәр уны язалай: ҡарғаның ҡанаттары сыбарға, ә ите ашарға яраҡһыҙға әйләнә. Бәйғәмбәрҙең эргәһенән осоп киткән ҡарға суҡышында ҡалған һыуҙы ҡарағайҙарға һибә һәм ҡарағайҙар мәңге йәшел ағасҡа, ә ҡарға меңйәшәргә әйләнә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Әбйәлил районы Байым ауылына оло юлдан ингән һәр кешене Шайморатов генералға ҡуйылған олпат таш һын ҡаршы ала ине. Тәүге һәйкәл 1964 йылда М. Шайморатовтың тыуған ауылы - Ҡырмыҫҡалы районы Биштәкә ауылында ҡуйылһа, икенсеһе 1970 йылда Байым ауылында күтәрелә. Йәғни, был скульптура республикабыҙҙа данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының тәүге командирына икенсе булып ижад ителгән һынлы сәнғәт әҫәре. Күптән түгел ошо һынды реконструкциялап, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һәләк булғандар өсөн ҡуйылған обелиск янына күсереп ултырттыҡ. Ни сәбәптән һәм ҡасан Урал аръяғында ятҡан ауылда Шайморатов генералға һәйкәл хасил булған икән һуң, тигән һорау шул мәлдә уянғайны.**

# БЕР ҺӘЙКӘЛ ТАРИХЫ

Үткән быуаттың 50-се йылдарына тиклем хәҙерге Байым ауыл советы территорияһында 5 колхоз булған. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, фронтовиктар тыуған яҡтарына ҡайта башлағас, күптәрен колхоз етәкселәре итеп тәғәйенләйҙәр. Яу яланынан иҫән ҡайтҡан яугирҙар хеҙмәттәштәренә, командирҙарына күңел төптәрендә ихтирам, иҫтәлек йөрөтә, уңайы килеп сыҡҡанда яуҙаштарының исемдәрен мәңгеләштерергә ынтыла. Тәүге шундай башланғыс 1947 йылда Аһылай ауылында теркәлә. Улар айырым колхоз булып бүленеп сыға һәм маршал К. Рокоссовский армияһы составында хеҙмәт итеүселәр яңы колхозды уның исеме менән атарға тәҡдим итә. Тәүге рәйесе Йәһүҙә Аҙнабаев була. 1952 йылда "Баҡса" колхозы рәйесе итеп Байым ауылынан Бәҙретдин Мифтахетдинов һайлана. Ул һуғыш юлын Башҡорт атлы кавалерия дивизияһында кавалерист булып үтә. Тәғәйенләнгән колхозына командиры Шайморатов генерал исемен биреүҙе дөйөм колхоз йыйылышына ҡуя. Был колхозға ҡараған Йәнекәй, Бәләкәй Ғәбдин ауылдары халҡы уның тәҡдимен хуплай. 1954 йылда Байым ауыл Советына ҡараған ауылдар, "Яңы маяҡ" колхозынан тыш, бер колхоз булып берләштерелә. Ете ауыл халҡын берләштергән хужалыҡҡа дөйөм колхоз йыйылышында М. Шайморатов исемен бирергә тигән ҡарар ҡабул итәләр. Күрше Ташбулат ауыл Советына ҡараған "40 лет Октября" колхозы ла ошо уҡ дивизияның полк командиры, яҡташтары генерал-майор Т. Кусимов исемен ала. Шулай итеп, 50-се йылдар башында, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында, М. Шайморатов менән Т. Кусимов исемдәре мәңгеләштерелә. Тыныс тормош шарттарында ике яуҙаш, данлыҡлы генералдар Әбйәлил районы халҡы хәтерендә тергеҙелә.

1964 йылда Шайморатов исемендәге колхоз рәйесе итеп Мәскәүҙең Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияһын тамамлаған Хәмит Ғәни улы Балдашов һайлана. Хужалыҡта талантлы белгес етәкселек иткән осорҙа (1964-1970 йй) колхоз иҡдисади, социаль яҡтан ныҡ үҫешә. Байымда 60 автомобилгә тәғәйенләнгән гараж, 312 урынлыҡ яңы типтағы урта мәктәп бинаһы, ике ҡатлы мәҙәниәт йорто, Ҡыҙыл йылғаһы аша бетон күпер, ашлыҡ һаҡлау өсөн үҙәк ток, 22 фатирлы йорт, Туйыш ауылында замана талаптарына яуап биргән тирмән, ун ауылда ла механизацияланған таш биналы фермалар сафҡа индерелә. Етәксе 1968 йылда генерал исемен йөрөткән колхоз үҙәгендә Шайморатовҡа һәйкәл асыуҙы тәҡдим итә. Шул осорҙа хужалыҡта баш бухгалтер вазифаһын башҡарған Лоҡман Әһел улы Исламов Өфөгә, скульптор Борис Дмитрович Фузеевҡа барып, һәйкәлдең эскизын ҡарап ҡайта.

"Ул осорҙа баш ҡалаға Белореттан самолет менән оса торғайныҡ. Өфөгә барып төшкәс тә тейешле адрес буйынса тәғәйенләнгән мастерскойҙы эҙләп таптым. Скульптор аҡ япманы асып, гипстан эшләнгән һынды күрһәтте. Башына бурка кейгән, бер ҡулына бинокль тотҡан, иңенә накидка япҡан сая ҡарашлы, асыҡ йөҙлө кешене күрҙем.

- Шайморатовҡа оҡшағанмы? - тип һораны скульптор.

- Ғәфү итегеҙ, мин уны күргәнем юҡ, - тип тураһын әйттем. Борис Дмитриевичҡа яуабым оҡшаны. Мөләйем итеп йылмайҙы ла:

- Шайморатов образы өҫтөндә эшләгән осорҙа төп консультантым генерал-майор Кусимов булды. Ижад емешемде Өфөлә йәшәгән Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы ветерандарына ла күрһәттем. Тәҡдимдәренән, кәңәштәренән һуң төҙәтмәләр индерҙем. Һеҙҙән алда ғына генерал Кусимов инеп, "Хас та Шайморатов!" тип сыҡты, - тине. Заказсы ойошма вәкиле булараҡ минең дә ризалығымды алғас, артабан һәйкәлде мәрмәрҙән эшләйәсәген белдерҙе" - тип һөйләй Лоҡман Исламов.

Ошо ваҡиғанан һуң йылдан ашыу ваҡыт үткәс, 1969 йылдың октябрь айында, һәйкәл әҙер, тигән телеграмма килә. Колхоздың ике машинаһында Байым-Асҡар-Баймаҡ-Йылайыр-Иҫәнғол-Мәләүез-Стәрлетамаҡ аша (ул ваҡытта Белорет-Инйәр-Архангел аша тура юл юҡ) ике көн тигәндә баш ҡалаға килеп, һәйкәлде ике машинаға тейәп алып ҡайталар. 1970 йылдың апрель айы еткәс, Байым ауылының көньяҡ осона постамент эшләп, колхоздың төҙөлөш бригадаһы ярҙамында һәйкәлде ҡорайҙар. Шулай итеп, 9 Май - Бөйөк Еңеүҙең 25 йыллығына арналған тантанала Шайморатовҡа һәйкәл асыла.

Һуғыш йылдары алыҫлаша барған һайын, тормош шарттары ла яҡшыра. Шайморатов һәйкәленән алыҫ түгел ике ҡатлы матур йорт ҡалҡып сыға. Был монумент ауылымдың йөҙөк ҡашына әйләнә. Ләкин тормош гел алға ғына тәгәрәмәй икән шул. Тәүҙә, 90-сы йылдар башында, көслө дәүләт - Советтар Союзы тарҡала. Күп тә көттөрмәй, данлыҡлы генерал йөрөткән колхоз банкротҡа әйләнеп, "Ҡыҙыл" крәҫтиәндәр хужалығы тигән исемгә күсә. Ул да иҡтисади көрсөккә ҡаршы тора алмай, юҡҡа сыға. Колхоздар, ауыл кешеләре генә бөлгөнлөккә төшмәй икән. Хужалыҡ тарҡалып, ун йыл үтеүгә, ғорурлығыбыҙ булған һәйкәлебеҙҙең дә бәсе китә башланы. Уның янындағы ике ҡатлы фатир ҙа шәхси ҡулдарға күсеп, йөҙөн юғалтты. Генералдың сая ҡараштары һүрәнләнә төштө һымаҡ, яугирҙың яурындарында тәрән һырҙар асылды. Шулай булһа ла яҡташтарым хәлдәренән килгәнсе ямап-ҡорап, таш һынды ҡурсалап торҙо. Һәр Еңеү көнөндә ветерандар генералға сәскә һалғанда, уларҙың М. Шайморатовҡа ҡарата йәлләнес ҡараштарын тойоуы ауыр, ә йәш быуын алдында икеләтә уңайһыҙ ине...

Бәхетебеҙгә күрә, 2014 йылда Урал аръяғы районларына Бөтөн донъя банкы урындағы башланғысты хуплау проектын тормошҡа ашырыу буйынса пилот проект тәҡдим итте. Был проектҡа ярашлы, урындағы халыҡ үҙе кәрәкле тип һанаған социаль объекттарға ремонт эштәре башҡара ала. Дөйөм смета проект суммаһының 10 процентын - урындағы халыҡ үҙе, 10 процентын - ауыл Советы, 5 процентын бағыусылар индерә, ә ҡалған сумманы Бөтөн донъя банкы түләй. Ошо хаҡта белгәс, ауылдаштарым башҡа проблемаларын ситкә ҡуйып, йыйында Шайморатов һәйкәлен Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандар обелискыһы янына күсереп, икеһенә лә капиталь ремонт эшләргә тигән ҡарар сығарҙы. Был изге эшкә берәү ҙә ҡаршы төшмәне. Һәр йорттан аҡса йыйып, ауыл Советы, бағыусылар һәм Бөтөн донъя банкы аҡсаһы менән 1 млн 498 мең һумлыҡ аҡса тупланды. Үткән йылдың декабрь айында Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата һуғыш яланында йәндәрен фиҙа ҡылған ата-бабаларыбыҙ хөрмәтенә оло бурысыбыҙҙы үтәп, йәш быуын алдында биткә ҡыҙыллыҡ килтермәҫтәй мөһабәт монумент барлыҡҡа килде. Генерал хәҙер Байым ауылының Дан аллеяһында ғорур баҫып тора.

**Илдар ИСЛАМОВ.**
**Әбйәлил районы.**




*Обелиск һәм Шайморатов һәйкәле реконструкциянан һуң. 2015 йыл.*

*✓ Гәзит биттәрендәге нәфрәт һәм үс менән һуғарылған мәҡәләләр башҡорт атлыларын дошманды аямайынса көрәшергә саҡыра. Уралдан йыраҡта булһа ла, яугирҙың үҙ өйөн, ауылын, туғандарын яҡлап һуғышыуын билдәләй.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# "ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР" -

## Башҡорт кавалерия дивизияһының пропаганда ҡоралы



*"Ҡыҙыл атлылар" гәзите мөхәррире яҙыусы Али Карнай.*

### Гәзитте кемдәр сығарған?

"Ҡыҙыл атлылар"ҙың ҡыйыу мөхәррире тураһында иҫтәлегендә Кирәй Мәргән түбәндәгеләрҙе яҙа: "Али Карнай һәр ваҡыт һалдаттар, һуғышсан командирҙар, политработниктар араһында булды. Уның полевой сумкаһы һәр төрлө иҫтәлектәр, һуғышсан эпизодтарҙы сағылдырған яҙмалар менән тулы була торғайны. Көн һайын тиерлек ул яңы ҡуйын дәфтәре башлай. Уны тултырғас, серияға бүлеп, номерлап, тәртипкә килтерә лә, йыйып, Өфөгә туғандарына ебәрә: "Материал ҡайта торһон әле. Бында юғалыуы бар бит. Иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, берәй роман һымаҡ нәмә яҙырға тура килер бит инде, ә? Кем яҙырға тейеш уны? Беҙ бит!" - тип яҙа ул. Али Карнайға тыуған иленә әйләнеп ҡайтырға насип булмай. 1943 йылдың 16 июнендә ул яу ҡырында һәләк була. Яҙырға хыялланған роман-эпопеяһы ла яҙылмай ҡала. Уның ебәргән көндәлектәренең бер өлөшө тыуған иленә килеп етмәй, килеп еткәндәре бөгөнгө көндәрҙә архивтарҙа һаҡлана".

### Мәҡәләләр тематикаһы

Гәзит биттәрендәге нәфрәт һәм үс менән һуғарылған мәҡәләләр башҡорт атлыларын дошманды аямайынса көрәшергә саҡыра. Уралдан йыраҡта булһа ла, яугирҙың үҙ өйөн, ауылын, туғандарын яҡлап һуғышыуын билдәләй. Сөнки һуғыш яланында шәхси яҙмыш юҡ. Ил яҙмышы - һинең шәхси яҙмышың, ғаиләң яҙмышы.

"Беҙҙең менән халыҡ" мәҡәләһендә гәзит яугирға: "Алдыбыҙҙа һуғыш яланы ята. Дошман алыҫ түгел. Ул беҙҙең һөйөклө аталарыбыҙҙың һәм әсәләребеҙҙең, йөрәк өлөшөбөҙ булған ҡатындарыбыҙҙың һәм балаларыбыҙҙың хоҡуҡтарын тапарға, сал Уралды, алтын Башҡортостанды, бай илебеҙҙе баҫып алып, бәхетле тормошобоҙҙо емерергә теләй... Башҡорт воины! Һин Украина яландарында алыҫтағы ҡатының, балаң, атаң, әсәңде яҡлап һуғышаһың. Улар һинең гвардеец исеменә тап төшөрмәүҙе талап итә", - тип өндәшә. Немецты үлтерергә, көрәштә арыҫлан булырға, рубежды ныҡ тоторға, дошманды үткәрмәҫкә, бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә саҡыра. "Уҡы, өйрән, ҡоралыңды отлично ға үҙләштер", тигән кәңәштәр бирә һәм "Еңеү беҙҙең яҡта булыр!" тип һуғышсыны рухландыра.

Агитацион йүнәлеш һәр мәҡәләлә тойомлана. Ошо мәҡәләнең аҙағында автор уҡыусыһына: "... Үҙеңдең Ватаның, халҡың өсөн көрәшеү - был ҙур дан. Ә Ватаның, халҡың өсөн һөйөклө полководец, Верховный Главнокомандующий, Маршал иптәш Сталин етәкселегендә көрәшеү - был икеләтә дан, был воин өсөн бәхет. Был бөйөк данға достоин булайыҡ, гвардеец иптәштәр!" - тип өндәшә. Нәфрәт һәм үс алыу тойғоһо менән һуғарылған мәҡәләләр гәзиттең һәр һанында осрай һәм төп өлөштө биләй.

Агитация маҡсатында әҙәби әҫәрҙәр ҙә ҡулланыла. Улар башлыса был гәзиттең мөхәррире Али Карнайҙың бәләкәй әҫәрҙәре була. "Нисә фрицты үлтерҙең?" исемле хикәйәһендә Али Карнай икенсе эшелонда, йәғни фронт һыҙығынан арттараҡ хеҙмәт итеүсе һалдаттың Уралдан, ҡатынынан хат алыуын һүрәтләй. Ә унда шундай һүҙҙәр бар: "Нисә фрицты үлтерҙең? Шуны айырып яҙ. Балалар ҙа ҡыҙыҡһыналар, һинең батырлығыңды белеп, беҙ шатланырбыҙ, ғорурланырбыҙ..." Ошо хат һалдаттың тыныслығын юғалта. Ул военкомға барып, үҙен тиҙерәк алғы һыҙыҡҡа ебәреүҙәрен үтенә. Уның бында ла мөһим эш эшләүе, барыбер фронтта булыуы тураһында һөйләүҙәренә ҡаршы: "Шулай ҙа, әгәр бер нисә фрицты үҙ ҡулым менән дөмөктөрмәһәм, нисек итеп мин Ватан һуғышында ҡатнаштым, тип һөйләрмен?" - ти ул. Был бәләкәй генә әҫәрҙә яҡын кешеһенән килгән хаттың һалдатҡа ни тиклем ныҡ тәьҫир итеүе һүрәтләнә.

Ә. Кирәйҙең (Кирәй Мәргәндең) "Мыйыҡ" хикәйәһе ике дуҫ боец тураһында. Бикбулатов менән Ишбулатов дуҫ ҡына түгел, улар бер райондан, бер колхоздан, ә һуғышҡа килгәс, икеһе лә ологайып китә. Бер юлы мыйыҡ ебәрәләр. Шулай бер саҡ блиндажда ултырғанда Ишбулатов иптәшенең мыйығына ҡарап тороп: "Шул мыйығыңдың бер бөртөгө өсөн күпме һорайһың?" - тип һорап ҡуя. Иптәше: "Ана шул ҡаршыла йөрөгән немецтарҙың береһен бер атыуҙа үлтерә алһаң, ошо затлы мыйыҡтың бер бөртөгөн йолҡоп алыу шәрәфенә ирешә алырһың", - тип яуап бирә. Шулай итеп, улар араһында ярыш башланып китә. Бер нисә көндән уларҙың мыйыҡтары шул хәтле һирәгәйә, йәмһеҙ булып тормаһын, тип, икеһе лә уны ҡырып ташлай...

Кавалерия дивизияһы булғас, гәзит биттәренән ат темаһы ла ситтә ҡалмай. Атты тәрбиәләүгә, ашатыуға, яуға әҙерләүгә арналған мәҡәләләргә ҙур урын бирелә. Аттарын насар ҡарағандар тәнҡитләнә. Айырым һандарҙа был темаға берәр бит урын бүленеүе мәғлүмәттең ни тиклем мөһим булыуы тураһында һөйләй. Хатта "Һин аҡһаҡ булһаң да һуғышҡа бар, һинең атыңдың дүрт аяғы бар бит", тигән башҡорт халыҡ мәҡәле килтерелә 1943 йылдың 4 июль һанында. "Ат - боевой ҡорал" мәҡәләһендә гвардия кесе лейтенанты Сергеев взводының ат ҡарау буйынса беренсе урын алып килеүе тураһында һөйләнелә. Был взводта атҡа һәр кем боевой ҡорал итеп ҡарай. Ат ҡараусы Ҡолгәрәевтың "Яҡшы аттан башҡа яҡшы кавалерия юҡ", тигән һүҙҙәре взводтың көрәш девизы булып тора.

Агитация эшенә айырым урын бирелә. Ошо темаға арналған махсус һандар ҙа сыға. Уларҙа агитация нисек алып барылырға тейешлеге хаҡында һүҙ бара. "Агитация яугирҙың психологияһына һәм шартҡа ҡарап, аныҡ, йөкмәткеле, идея яғынан тотанаҡлы булырға тейеш. Агитаторҙар был бурыстарын һәйбәт үтәһен өсөн уларға ярҙам кәрәк. Семинарҙарҙа, политработниктың агитатор менән осрашыуы мәлендә уға бөтә мәсьәләләрҙе аңлатырға, теге йәки был хәлде дөрөҫ баһаларға өйрәтергә кәрәк... Беҙ агитаторҙың үҙ бурыстарына яуап бирә алыуына, үҙенең ялҡынлы большевистик һүҙе менән боецтарҙы иптәш Сталиндың бойороғон үтәүгә, немец-фашист бандиттарын йәһәтерәк юҡ итеүгә мобилизациялауына өлгәшергә тейешбеҙ", - тиелә гәзит мәҡәләһендә.

Гәзит бойороҡтарҙың үтәлеүенә ҙур әһәмиәт бирә. 1943 йылдың май айында Сталиндың 195-се бойороғо сыҡҡандан һуң гәзит биттәрендә уның үтәлеше төп урынды ала. Һәр частан бойороҡтоң үтәлеше тураһында хәбәрҙәр килә. Бойороҡто теүәл үтәүселәр өлгө итеп ҡуйыла, уға битараф ҡарағандар ҡаты тәнҡитләнә. Гәзиттең 150-се һанындағы баш мәҡәләлә "Хәҙерге ваҡытта бойороҡто унда ҡуйылған мәсьәләләр буйынса айырым рәүештә ентекләп өйрәнеү бара. Бойороҡто ныҡлап өйрәнергә, яҡшы хәтерҙә ҡалдырырға кәрәк. Ләкин, иң мөһиме, уны ғәмәли яҡтан тормошҡа ашыра башлау", - тип яҙыла. Мәҡәлә аҙағында һалдат алдында торған бурыс аңлатыла: ул, уҡырға, өйрәнергә, бойороҡто тормошҡа ашырырға, тип яңғырай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакцияһы коллективы һуғыш ваҡытында Башҡорт атлылары кеүек үк данлыҡлы юл үтә. Дивизияның фронтҡа ебәрелгән көнөнән алып, дивизияның 1943 йылда эшләйәсәк бөйөк рейдына тиклем, гәзит дивизияны тоғро юлдаш булып оҙата бара. Дивизия рейдҡа ингәс, редакция бүленеп ҡала. Ошо осор эсендә Полевая почта 35710 адресы буйынса урынлашҡан редакция дивизияның данлыҡлы юлында төп агитатор, рухи ҡорал булып ҡала. Али Карнай, Шакир Насиров, Әхтәм Ихсан кеүек әҙиптәр, Хөршиҙә Хәирова кеүек хәреф йыйыусы ҡыҙҙар гәзиттең һәр һанын ваҡытында сығарыуҙы тәьмин итә. Уларҙың тырышлығы менән күпселеге башҡорттарҙан торған милли дивизия туған телендә гәзит уҡыу бәхетенә өлгәшә.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 18-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Башҡорттарҙың физик тибы минең махсус эшемдә ентекле тикшерелде. Шуға күрә бында мин башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе мәсьәләһенә генә туҡталам. Иң тәүҙә барлыҡ башҡорттар өсөн дә хас булған берҙәм тип тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгеллеген билдәләп китер инем. Был халыҡ, әйтеп үтеүемсә, европеоид һәм монголоид ҡәбиләләрҙең ҡушылыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Билдәле бер сик эсендәге башҡорт ырыуҙары араһындағы никахтар һөҙөмтәһендә бер төрлө дөйөм физик тип барлыҡҡа килә, икенсе яҡтан, сит ҡәбиләләр менән ҡатнашыу һөҙөмтәһендә ошо халыҡтың физик тибында урындағы үҙенсәлек күренә. Үткәрелгән тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә антропологик үҙенсәлектәре менән айырлып торған өс өлкәне айырыу мөмкин булды.

Беренсе, көнсығыш өлкә, Урал аръяғы һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттары көслө пигментация (төҫ алыу) менән айырыла. Улар араһында ҡуңыр, йәғни ҡуңыр сәсле һәм ҡуңыр күҙлеләр 75,8 процентты тәшкил итә. Буйҙары уртаса - 165 см һәм башҡа өлкә башҡорттарынан айырылмай. Әммә уларҙың тән пропорцияһы икенсе төрлө - мыҡты һәм оҙон кәүҙәле булғанда ла, аяҡтары ҡыҫҡа. Баш күрһәткестәре буйынса көнсығыш башҡорттар ҙур түңәрәк башлы булыуҙары менән айырыла. Бәләкәй башлылар 78,5 процент булғанда ла баш күрһәткесе 82,5. Был өлкә башҡорттарының башҡа өлкәләгеләр менән сағыштырғанда танауҙары күпкә киңерәк (74,2), йөҙ күрһәткесе лә ҙурыраҡ (77). Көнсығыш өлкәһе башҡорттарының йөҙө киң (бит киңлеге диаметры 145,2 мм) булыуға ҡарамаҫтан, баш бейеклеге барлыҡ өс өлкәлә лә бер тигеҙ (188 мм). Бынан тыш, был өлкә башҡорттары өсөн ныҡ ҡарпыш (35,3 процент), ҙур һәм оҙон ҡолаҡтар хас (ҡолаҡтың уртаса күрһәткесе 52,3).

Көнсығыш өлкә башҡорттарының физик тибының шундай дөйөм характеристикаһынан бер-береһенән айырылған башҡорттар йәшәгән райондарҙы айырыу мөһим. Был өлкәнең беренсе районы (а) алыҫ төньяҡ-көнсығышта урынлашҡан. Унда Урал аръяғы ҡатайҙары, ҡыуаҡандар менән ҡара-барын-табындар һәм әйлеләрҙең көнсығыш өлөшө йәшәй. Был район башҡорттарына хас сифат булып тотош өлкәләге кеүек көслө пигментация (75,4 процент ҡуңыр тип) тора. Буй уртасанан саҡ ҡына ҡыҫҡа (164 см), башҡорттарҙа осраған ҡыҫҡа аяҡлылыҡтың иң ҙур күләме (уртаса скелии күрһәткесе 85,9), башҡорттарға хас булғанса түңәрәк башлылыҡ (түңәрәк башлылар бик күп - 87,9 процент булғанда баш күрһәткесенең уртаса һаны 83,5), танау (74,4), йөҙ (77,1) күрһәткестәре барлыҡ көнсығыш өлкә башҡорттарыныҡы кеүек. Бигерәк тә сағыштырмаса һиҙелерлек табаҡ битле башҡорттар өсөн бик ҙур булған йөҙ киңлеге (146,1 мм) айырым иғтибар талап итә. Был район башҡорттары өсөн биттәге төктәрҙең аҙ булыуы, күҙҙәр араһының киңлеге һәм танау биленең эскә батып тороуы хас **(һүрәттәр)**.



✓ *Атайға Беренсе Украина фронты яугирҙары исеменән 1945 йылда Мәскәү ҡалаһында үткән Еңеү парадында ҡатнашыу хоҡуғы бирелә. Һалдаттарҙы 4 аҙна буйы әҙерләйҙәр. Тәүлегенә 8-әр сәғәт строевой марш менән күнекмә яһайҙар.*

# ҺЕҘҘЕҢ БАТЫРЛЫҠТЫ БЕЛӘБЕҘ...

**Һәр ғаиләнең үҙ геройы - һуғышта ҡатнашҡан ветераны барҙыр. Ә һеҙҙең батырығыҙ кем? Уның хәрби юлы тураһында һеҙ ниҙәр беләһегеҙ?**

**Флүзә Санъярова, хаҡлы ялда, Баймаҡ районы Темәс ауылы:** Атайымды, Борай районының Алдар ауылында йәшәүсе дүрт балалы Зәкировтарҙың ғаилә башлығы Хәмит Зәкир улын, 1942 йылда Ҡыҙыл Армия сафына алалар. Ләкин шунда уҡ ут эсенә алып барып тыҡмайҙар. Тәүҙә беҙҙең ауылдан 150 саҡрым алыҫлығындағы Әлкә хәрби ҡаласығында әҙерлек үтергә ебәрәләр. Атайым Әлкәлә булған саҡта әсәйем, ат егеп, ун биш көнгә бер тапҡыр уға кейем, ашарына ризыҡ ташый. Шулай бер килгән сағында минә - бишенсе сабыйҙарына ғүмер бирәләр. Оҙаҡламай атайҙы фронҡа оҙаталар. Сабыйҙары донъяға килеүен хәбәр иткән хатҡа яуап итеп, атайым бәләкәй генә шыптырлаҡ ҡағыҙға: "Ҡыҙыма Флүзә, тип, беҙҙең шәфҡәт туташының исемен ҡуш", - тип үтенә, үҙенең имен-һау ҡайтырына ышаныусын да йәшермәй. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға был ҡәһәрле һуғыштан әйләнеп ҡайтырға насип булмай. Әсәйемде оло ҡайғыға һалып, тәүҙә "хәбәрһеҙ юғалды" тигән, аҙаҡ "һәләк булды" тигән ҡағыҙҙар килә. Атайымдың минә ниндәй исем ҡушырға кәрәклеген белдереп яҙған теге хатын 6-7 йәшлек сағымда минә күрһәтеләр. Унда яҙылған бер-нисә юлды, айырыуса, "шәфҡәт туташы" тигән һүҙҙе хәтеремә ныҡ киртеп ҡуйғанмын, күрәһең. Хатта үҙемә: "Ҙурайып, кеше булһам, мотлаҡ шәфҡәт туташы буласаҡмын - атайымдың васыятын үтәйәсәкмен", - тигән маҡсат ҡуйыуым да хәтерҙә. Медицина өлкәһе хеҙмәткәре булыу теләге 5-се синыфҡа тиклем күрше ауылға йәйәү йөрөп уҡыған сағымда ла, 6-сы синыфты тамамлап, фермала быҙау ҡараусы булып эш башлағанымда ла һүрелмәне - мине гел алға ғына әйҙәне. Тик уҡырға китергә уйлаһам да, колхоздан еңел генә сығып та китеп булманы: эш тә эш. Ахырҙа, 8-се синыфты тамамлағас, 1962 йылда бер апайға эйәреп, медицина училищеһына уҡырға инергә, тип, Сибайға киттем дә барҙым. Ләкин конкурстан үтә алмайынса, 11-се училище ашханаһына һауыт-һаба йыуыусы булып эшкә урынлаштым. "Быйыл булмаһа, икенсе йылына инермен", тип уйланым. Ошо йылда яҙмыш Сибайҙа шоферҙар курсында уҡып йөрөгән Темәс ауылы егете Хәбибулла Урмантаев менән осраштырҙы. Дуҫлашып йөрөгән саҡта ул минең шәфҡәт туташы булырға хыялланыуымды ишетеп: "Әйҙә, минә кейәүгә сыҡ, уҡытырмын", - тип, мине үҙ ауылына алып ҡайтып та китте. Һүҙендә торҙо ирем, Сибайҙа дезинфекторҙар курсы асылыуы мәғлүм булғас, өлкән ҡыҙыбыҙға йәш тә өс ай тигәндә, мине уҡырға ебәрҙе. Шулай итеп, мин ғүмерлек хыялымды, атайымдың хыялын тормошҡа ашырҙым - хаҡлы ялға сыҡҡансы Темәс участка дауаханаһында тәүҙә - дезинфектор, һуңынан ашнаҡсы булып эшләнем. Атайымдың яу юлы тураһында мәғлүмәттәр һаҡланмаған. Әсәйем дә, апайҙарым да, тормош иптәшем дә был донъяла юҡ инде, атайымдың теге хаты ла юғалған.

**Мөхәммәт Ҡолбирҙин, Бөрйән районы Иҫке Мөсәт ауылы:** Минең атайым, Ҡолбирҙин Әбделғәни Әбделғәлим улы, Бөйөк Ватан һуғышына 1943 йылдың август айында алынып, 1945 йылда Берлинғаса барып еткән, шулай уҡ Мәскәү ҡалаһында Бөйөк Еңеү парадында ҡатнашҡан кеше. Яңыраҡ ҡәҙерләп һаҡланған ҡайһы бер документтарҙы аҡтарып ултырҙым да, атайымдың бөтөн ғүмер юлы күҙ алдыма килгәндәй булды.



Ул 1923 йылдың 28 ғинуарында Бөрйән районы Иҫке Мөсәт ауылында биш балалы ғаиләлә баш бала булып донъяға килә. 1939 йылда етенсе синыфты тамамлағас, "Яңы юл" колхозында эш башлай. Колхоз етәкселәре ни ҡушһа, бар эште еренә еткереп башҡара. 1942 йылдың 12 июнендә хәрби хеҙмәткә алынып, хәрби парашютсылар әҙерләү мәктәбендә уҡый. 1943 йылдың 12 августа Сталинград янында барған алыштарға десантсы булып инә. Ошо мәлдә коммунистар сафына ҡабул ителә. Клецкая ауылын дошмандан азат иткән саҡта тәүге яраһын ала. Ул ваҡытта ул пулеметсы ла, элемтәсе лә була. Ҡанлы бәрелештәрҙең береһен былай тип һөйләй торғайны: "Йылға аша элемтә булдырырға бойороҡ алдыҡ. Был заданиены үтәр өсөн биш кеше һайлап алынды. Шулар араһында мин дә бар. Дошманға күренмәй генә, ағас кешмәк эшләп, уның эсенә кабель һалып, икенсе ярға ҡуҙғалдыҡ. Ноябрь айы. Һыуыҡ һыу һөйәктәргә тиклем үтә. Етмәһә, фашистар бер туҡтауһыҙ ракета яҡтырта, йылға өҫтөнә ямғыр һымаҡ пуля яуҙыра. Ләкин беҙ нисек тә икенсе ярға сығып, элемтә булдырҙыҡ. Был мөһим заданиены үтәп сыҡҡаныбыҙ өсөн мин дә 1-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградландым". Уның башҡа наградалары ла бик күп ине атайымдың. "За боевые заслуги", "За отвагу", "За освобождение Варшавы", "За взятие Берлина", I, II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары, һуғыш мәлендә юғары командование тарафынан бирелгән маҡтау ҡағыҙҙары (бөтәһе 13), һуғыштан һуңғы юбилей миҙалдары.

Оҙон буйлы, мөһабәт кәүҙәле ине атай. Буйы 195 сантиметр булды, ҡалын тауышлы кеше ине. Шуларҙың бөтәһен дә иҫәпкә алып, атайға Беренсе Украина фронты яугирҙары исеменән 1945 йылда Мәскәү ҡалаһында үткән Еңеү парадында ҡатнашыу хоҡуғы бирелә. Һалдаттарҙы 4 аҙна буйы әҙерләйҙәр. Тәүлегенә 8-әр сәғәт строевой марш менән күнекмә яһайҙар. "Ошо строевой күнекмәләрҙе эшләгән саҡта әллә нисә пар итек туҙҙырҙыҡ", - тип һөйләй торғайны атайым. 1946 йылдың 25 мартындағы указ менән ул демобилизацияланып, тыуған яғына әйләнеп ҡайта һәм "Яңы юл" колхозында эшен дауам итә. Тағы, бер нисә йыл беҙҙең ауылдан 35 саҡрым алыҫлығындағы Аҫҡар ауылына саңғы менән йөрөп, физкультура уҡытыусыһы булып та эшләй. Шул ваҡытта буласаҡ ҡатыны Ғәлиәне осрата һәм кәләш итеп алып та ҡайта. Улар биш балаға ғүмер бирә.

Атайҙы уҡытыусылар байрам һайын мәктәпкә саҡырып, һуғыш хәтирәләрен һөйләтә ине. Ул, үҙ сиратында, ихласлап, һуғыш хәтирәләрен бәйән итә. Бөйөк Еңеүҙең 50 йыллығын бик ашҡынып көтө ул. "Бүтән был байрамға бара алмам, ейәндәрем мине барып күрһендәр", - тип, ейәндәрен дә район үҙәгенә байрамға алып барҙы. Һәм, ысынлап та, 1995 йылдың 15 июнендә ул был донъянан китеп тә барҙы. Үҙенең ҡасан үлерен белеп йөрөнө: баҡтиһәң, һуғышҡа китеп барған мәлендә вокзалда бер сиған ҡатыны: "Ҡурҡма, һуғыштан имен-һау ҡайтаһың, һәйбәт итеп йәшәйһең һәм 73 йәшендә үләһең", - тип әйткән икән.

**Салауат Янғужин, Өфө ҡалаһы:** Башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуында ҙур роль уйнаған шәхес - юрматы ырыуы башлығы Тәтегәс мырҙа вариҫы, 1913 йылда Стәрлебаш районы Табылды ауылында тыуған олатайым Талха Хәйҙәр улы Тәтегәсов, РФ Оборона министрлығы үҙәк архивы материалдарынан күренеүенсә, 1935 йылда Ҡыҙыл Армия сафына алына. Һуғыш башланғанда өлкән лейтенант дәрәжәһендә хеҙмәт итә. Һуғышта Белорус фронтының 5-се тимер юл бригадаһының 79-сы төҙөкләндереү батальонының 2-се тимер юл ротаһында взвод командиры булып хеҙмәт итә. Хәрби бурысын бик ауыр шарттарҙа үтәргә тура килә уларға. РФ Оборона министрлығы үҙәк архивында шулай уҡ Талха Тәтегәсов взводының Украинаның Тернополь (Гусятин станцияһы янында) һәм Полтава (Лохвица станцияһы эргәһендә) өлкәләрендә 1941 йылдың 6 июлендә һәм 12 сентябрендә бәрелештәрҙә ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәт бар.

Талха олатай һуғыштың тәүге көндәренән үк үҙен яҡшы офицер, үҙ эшен һәйбәт белеүсе, һәләтле ойоштороусы итеп таныта. Өлкән лейтенант Тәтегәсовтың оҫта ойоштороуы арҡаһында, уның взводы 1943 йылдың сентябрендә Коренево станцияһын төҙөкләндереүҙе бер тәүлеккә иртәрәк, йәғни, эште 120 процентҡа иртәрәк тамамлап та ҡуя. Шул уҡ айҙа Кашары менән Грузское станциялары араһын да билдәләнгән көндән ике тәүлеккә иртәрәк төҙөкләндереп бөтә. 7 сентябрҙә Плиски станцияһына дошман самолеттары һөжүм итеп, бер-нисә вагонды шартлата. Һөҙөмтәлә, вагон эсендәге ярылмаған снарядтар йән-яҡҡа сәселә. Ҡайһылары бына-бына шартлар сиккә етә. Поездар хәрәкәте туҡтатыла. Ошондай ҙур ҡурҡыныс янағанда Талха Тәтегәсов һәм уның взводы тиҙ арала шартламаған снарядтарҙан бушатып, станцияны эшләрлек хәлгә килтерә. Ошо батырлыҡтары теркәлгән олатайымдың Үҙәк архивта.

Олатай һуғыштан һуң Свердлов өлкәһе Екатеринбург ҡалаһында йәшәне һәм эшләне. Һуғыш ветерандарына арналған төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашты. Оло йәштә - 91 йәшендә булыуына ҡарамаҫтан, тыуған Башҡортостанын, туғандарын онотманы.

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

## ТЫНЫСЛЫҠТЫ БӘПЛӘП ҺӨЙӨГӨҘ!

Йәһәннәмме йәнде иҙгән һуғыш,
Ерҙә ҡоҙғон туйын ҡуҙғытҡан?
Мина түгел, әҙәм йөрәктәрен
Ҡара ҡағыҙ ярып ҡуҙғатҡан.

Ут-ялҡындар Ерҙе генә түгел,
Йәлләмәгән кеше күңелен.
Һөрөмдәрҙән күкте арындырып,
Аҫыл ирҙәр күпме күмелде.

Йәнтөйәккә ҡайтҡан һалдаттарҙың
Рух байрағы - илдә тыныслыҡ.
Күңелдәрҙә снаряд шартлаһа ла,
Һалдат йәнен алды ҡырыҫлыҡ...

Апрель һайын шрапнель шартлауҙарын
Ишетәлер олпат ветеран.
Көнбайыштан иҫкән һалҡын елдәр
Ҡуҙғатты ла йәнә хәтерен:

- Ергә вәхшәт ҡулы һуҙылһа ла,
Тыныслыҡты бәпләп һөйөгөҙ.
Йәндәй күргән йәрем кеүек илдә
Аҡ бәхеткә тулһын өйөбөҙ!

...Аҡ күбектәй муйыл сәскәләре
Наҙлы майҙың нурлы сәләме.
Ә ҡулдарҙа сәскә булып атҡан
Тыныслыҡтың ап-аҡ әләме!

**Фәнил БҮЛӘКОВ.**

*✓ Хәҙер йәштәр ҡайҙа эш хаҡы күберәк - шунда ынтыла. Бөтөн ерҙә лә ҙур эш хаҡы бирмәйҙәр, шуға күбеһе эшләмәй, эскегә һалыша. Насар ғәҙәттәрҙең барыһы ла - эшләмәүҙән.*



ЕҢЕҮГӘ 70 ЙЫЛ 1945 2015

# ВЕТЕРАН ҺҮҘЕ...

## аҡылдың үҙе

**Һәр замандың үҙ ауырлығы тиһәләр ҙә, һеҙҙең быуынға барыбер ҙә һынауҙарҙың иң тосо эләкте. Ул һынауҙарҙы лайыҡлы үткән ветерандар булараҡ, киләһе быуынға - йәштәргә ниндәй теләктәр еткерерһегеҙ?**

**Әмир Шамаев, медицина, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны:** Элек кеше берберeһе өсөн үлергә әҙер ине. Ә хәҙергеләрҙән ундай үҙ-үҙен ҡорбан итеүҙәрҙе өмөт итеп булмай. Һуғыш ваҡытында күршеһе ас ултырһа, кеше күршеһен уйланы. Берҙәмлек ныҡлы булды, тап ошо берҙәмлек илде көслө итте лә инде. Бөгөнгө тарҡаулыҡ эсте бошора. Йәштәр, енелерәк йәшәү юлдары тураһында баш ватып, "ил өсөн кәрәк" тигән һүҙҙе онотто. Әммә улар, еңеллек эҙләп, үҙҙәренең көндәлек тормошон ғына ҡатмарлаштырҙы. Әлбиттә, ғәйеп йәштәрҙә генә лә түгел. Был һүҙҙәр ҙә бөтөн йәштәргә лә ҡағылмай. Бына тигәндәре лә бар уларҙың. Насар ғәҙәттәр менән дуҫ булмағандар, иманға, белемгә ынтылғандары ла күп. Шуныһы беҙҙе ҡыуандыра, әлбиттә. Ә барыбер йәштәрҙең кешелеклерәк булыуын теләйем. Хеҙмәтте һанлаһындар.

Үҙемдең тормошомдан, эшләгән эштәремдән ҡәнәғәтмен. Ғаиләм дә яҡшы. Ҡатыным да, балаларым да - табиптар, фән кандидаттары. Үҙем дә күп йылдар медицина өлкәһендә эшләнем. Башлыса етәксе урындар биләргә тура килде. Һәр саҡ тәү сиратта хеҙмәткәрҙәрҙең торлаҡ мәсьәләһен хәл итергә тырыштым. Тырышлығым бушҡа китмәне - ауылда эшләгәндә табиптар өсөн йорт һалыуҙан башланым, ҡалала бер-нисә күп ҡатлы йорт тәҙәтеүгә тиклем барып еттем. Нимә генә эшләһәм дә, башымда: "Табиптарыма фатир тәҙәтергә кәрәк", - тигән уй йөрөнө. Етәксенең ошондай эштәре хеҙмәткәрҙәрҙе берләштерә, эшкә ылыҡтыра. Хәҙер ҡайҙа барһам да, мине "атай"тип кенә йөрөтәләр.

**Рәмил Вәхитов, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны:** Һуғыш башланғанда миңә 13 йәш ине. Ниндәй ауырлыҡ хәтерегеҙҙә айырыуса ныҡ уйылып ҡалған, тиһәгеҙ, кәтмәгәндә "һуғыш башланды" тигән хәбәр ишетеү иң ауыры булғандыр. Хәрби хеҙмәткә яраҡлы ир-ат, иң яҡшы аттар фронтҡа алынғас, баҫыу эштәре беҙҙең кеүек 13-15 йәшлек балалар иңенә төштө. Колхоз эшенән тыш, йорт эштәрен дә беҙгә алып барырға тура килде. Ерҙе фронтҡа алынған аттарҙан ҡалған арыҡ, сибек, ауырыу аттар менән һөрҙөк. Улары арығас, үгеҙҙәр ектек. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтөн ауырлыҡты ил менән бергә кисерҙек. Шулай ҙа аслыҡ - ауырлыҡтарҙың иң хәтәре булды. Һуғыш алдынан ике йыл буйы ҡоролоҡ булғас, ашарға икмәк булманы. Беҙҙең әсәй алабута орлоғонан икмәк бешерә торғайны. Улары таш һымаҡ ҡаты, шулай ҙа көҙөн шул икмәкте кимерҙек. Йәйгеһен ашарға яраҡлы үләндәр сығыуын көтөп ала торғайныҡ. Тамырҙыҡтар, ашарға яраҡлы үләндәр беҙҙе ҡотҡарып ҡалды.

Хеҙмәт беҙҙе сыныҡтырҙы. Хәҙер ҡалала балаларға, йәштәргә эш эләкмәй. Был, бер ҡараһаң, яҡшы, икенсе яҡтан, бик үк һәйбәт тә түгел. Әлеге лә баяғы, хеҙмәт тәрбиәһе онотола төштө. Хәҙер йәштәр ҡайҙа эш хаҡы күберәк - шунда ынтыла. Бөтөн ерҙә лә ҙур эш хаҡы бирмәйҙәр, шуға күбеһе эшләмәй, эскегә һалыша. Насар ғәҙәттәрҙең барыһы ла - эшләмәүҙән. Көсөң ташып тора икән - эшлә, туғандарыңа файҙа килтер ҙә бит...

Йәштәргә шуны әйткем килә: бөтөн ауырлыҡтарға ла түҙһендәр ине. Беҙҙе ул ауырлыҡтар сыныҡтырҙы, шуғалыр ҙа, бөгөнгө көн ауырлыҡтары беҙгә бар ни, юҡ ни һымаҡ.

**Борис Әхмәтйәнов, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, мотоуҡсылар, танк полктары командиры, полковник:** 1941 йылдан көньяҡ-көнбайыш фронтта Анапа янындағы һуғыштарҙа, Төньяҡ Кавказ фронтында, аҙаҡ көнсығыш Пруссияла барған һуғыштарҙа ҡатнаштыҡ. Фронтта ауырлыҡтар күп булды: яҡшы генералдар етеңкерәмәне. Күп тапҡырҙар хәрби операцияны ойоштора белмәгәнектән еңелеүҙәргә дусар булдыҡ. Ҡайны саҡта аҙыҡ-түлек, ҡорал-яраҡ менән тәьмин итеү ҙә насарыраҡ булды. Мин, командир булараҡ, ҡорал-яраҡҡа һәр ваҡыт мохтажлыҡ кисерҙем, уларҙы йыш ҡына үҙ ваҡытында килтермәй йонсоталар ине.

Йәштәргә шуны әйткем килә: тәндә лә, йәндә лә сәләмәт тотһондар, тарихты өйрәнһендәр, Ватанды яратһындар, ҡыйыу булһындар.

**Азат Мағазов, яҙыусы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, полковник:** Донялар улар өсөн имен торһон. Йәштәр үҙҙәре теләгән, күңелдәре яткан һөнәр һайлаһын. Тағы, шуны өҫтәге килә: беҙҙең йәштәр бынамын тигән. Юғиһә: "Элек йәштәр шулай ине, былай ине, ә хәҙер йәштәр икенсе төрлө" - тип, йәштәрәбеҙҙе ныҡ тәнҡитләп ебәрәләр. Минеңсә, бөгөнгө йәштәр бик яҡшылар, белемләләр, маҡсатлылар. Улар мәғлүмәт менән шул тиклем оҫта эш итәләр. Шул мәғлүмәт ҡара урманында аҙашмаһындар, үҙҙәренең ҡиблаларын юғалтмаһындар, тип кенә теләргә ҡала. Нигеҙе, асылы саф булһа, донъя үҙгәрә ҡалғанда ла уларҙы бер-нисә айҙа ҡағып-сүкеп патриот итеп була ул.

**Закир Зыянгиров, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Өфө ҡалаһы:** Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү көнөндә Япония сигендә - Маньчжурияла, Порт-Артур тигән ҡалала хеҙмәт итә инем. Беҙгә ауырлыҡтар менән осрашырға ул тиклем тура килмәне. Беҙ илебеҙҙең көнсығыш сиген һаҡланыҡ. Ике ай эсендә япондарҙы еңдек. Япондар бөтөнләй һуғышманы - әсиргә төштө. Әсирҙәрҙән: "Ниңә беҙгә ҡаршы һуғышманығыҙ һуң?" - тип һорағайныҡ: "Беҙгә комсомолдарға ҡаршы һуғышмаҫҡа, тигән бойороҡ килде", - тип яуап ҡайтарҙы улар. Шулай итеп, СССР дәүләте сигенән Порт-Артурға ике ай эсендә барып еттек. Һуғыш бөткәс, беҙҙе, йәшерәк һалдаттарҙы, Порт-Артурҙағы хәрби диңгеҙ базаһында ҡалдырҙылар, ә олораҡ йәштәгеләрҙе өйҙәренә ҡайтарҙылар.Шулай итеп, мин 7 йыл буйына халҡыбыҙҙың бик аяныслы тарихы менән бәйле Порт-Артурҙа хеҙмәт иттем. Диңгеҙ буйында саф һауала йәшәгәнгә, әүҙем рәүештә спорт менән шөғөлләнгәнгәләр, үҙемдә гел яҡшы тойҙом. Әле лә һынатмайым - гармун тартһалар, инәлтеп тормай, бейеп тә китәм. Иллә мәгәр, спиртлы эсемлек эсә икән был олатай, шуға бейейҙер, тип уйлап ҡуймағыҙ - ғүмерем буйы араҡыһын да эсмәнем, тәмәкеһен дә тартманым. Эшем дә шуны талап итте. Һуғыштан һуң Өфөлә хәрби училищела уҡыным да, Өфө йылға портына эшкә урынлаштым. 40 йылдан ашыу капитан булдым - пассажирҙары ла, йөгө лә ташылды. Йөҙләгән кешене ултыртып, теплоходта йөрөткәндә, 300-ләгән метрлыҡ һал таҡтырып йөҙгәндә лә спиртлы эсемлек түгел, тәмәке тартыу ҙа ярамай. Ғүмерем буйы тип әйтерлек режим менән йәшәнем. Йәш ватандаштарҙы ла сәләмәт тормошҡа саҡырам. Бына шулай ҡаршылайым мин Бөйөк Еңеүҙең 70-се яҙын.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**



*Һүрәттә: (һулдан уңға, алдағы рәттә): Әмир Шамаев, Борис Әхмәтйәнов, Азат Мағазов, Рәмил Вәхитов, (арттағы рәттә): Михаил Черников, Закир Зыянгиров, Әбүҙәр Мәхмүтйәнов.*

---

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

*Лариса АБДУЛЛИНА*

# ҺУҒЫШ ҺӘМ ҠАТЫН

Һорамағыҙ минән үткәндәрҙе,
Мин уларҙы алыҫ оҙаттым.
Тик белегеҙ: берен-бере таный
Ҡанлы һуғыш менән был ҡатын.

Бер-берәһен улар күптән белә,
Фронт яулығын ҡыҙҙың систергән.
Уларҙан ул байраҡ яһаған, йә
Яугир өсөн биштәр тектергән.
Берен-бере улар күптән таный:
Аҡылынан яҙған был алыш -
Мәрхәмәтлек юлын юғалтҡандай,
Ғаләмдәрҙә ҡалған туҡталып.
Һуғыш күҙҙәренә ҡан һауған бит,
Ул танымай әллә берен-бере?
Күҙҙәремә ҡара, ҡанлы вәхшәт,
Унда ялбарыуҙы күрерһең!
Был Күктәрҙән күпме һораным мин -
Һынауыңмы әллә асылды?
Нимәгәлер ишаралар яһап,
Миналарҙан һауа ярылды.
Был сәстәрем минең оҙон ине,
Шарламала уны сайҡаным.
Яуҙар өсөн тиеп үҫмәнәм дә,
Эйе, аға сардар ир ҡаны.

Ошо һуғыш!
Шул ҡәһәрле миҙгел
Яугир итте ҡабат йөрәкте.
Тәрән зиһендәге бер тәҡдирем
Илде һаҡла, тиеп өйрәтте.
Илде һаҡла! Илде һаҡла? Нисек?
Мин бит бары ҡатын, ҡыҙ бала.
Асылдарым өйҙә, ғаиләлә,
Бала менән булмыш һынала!

Икеләнеү ҡатыш ҡомар менән
Сәстәремдең киҫеп толомон -
Тәүге яуҙа һәләк булғас атай,
Күккә ҡарап үкһеп олоном.
Былай булғас - фашистарға ҡаршы!
Дошманымдың бағам күҙенә.
Күлдәгемде итәк алыштыра,
Кәрәк "Яуға!" тигән һүҙ генә.
Фронтҡа икән, әйҙә, нәфрәт, алға,
Нәзәкәтте тәрән йәшерәм.
Бер ауылда мина шартланы ла,
Иҫтәлеккә ҡалды был шырам.

Юҡ, битемдә түгел, йөрәгемдә,
Тарих йөрәгендә ҡалды ул.
Мине генә түгел, гүзәл заттың
Һәр берeһен зарға һалды ул.
Дәрт-дарманым етерлек тә кеүек,
Тик туҡтамай ниңә алыштар?
Сәскә кеүек, яҡты ҡараш көтәм,
Һынташ күренһәм дә мин тыштан.
Хәҙер һынам, хәҙер бөгөләм мин,
"Бәйләнеште көйлә, Яхина!"
Командирҙың бойороҡ тауыштары
Нөктә ҡуя минең аһыма.
Тик бер мәлгә тынлыҡ булыр микән?
Ҡайын бөрөләре асылған.
Һабантурғай ялан иңләй алмай
Урман ышығында талсыға.

Һуғыш, минең яулығымды ҡайтар!
Оҙона төштө толомом.
Миңә һинең һәр ишараң - ғазап!
Мин бит яҡты тойғо ҡоломон!
Әллә инде ҡан хәтере көсәп,
Нәфрәт ҡатыш ярһыу - мин бында.
Бала имеҙһем килә минең,
Тибешкәндәй ниҙер ҡарында...
Мин - ҡатын-ҡыҙ!
Һуғыш, ҡан-ҡойоштар
Асылымды минең юҡ итә.
Ҡулдарына ҡорал алған ҡатын
Кешелектең үҙен өркөтә!
Мәрхәмәтлек йырын йырлар инем,
Тыныслыҡҡа урын бирегеҙ!
Айышына был Ер әйләнһә лә,
Осоп барған кеүек кире беҙ.
Миһырбанға тик бер аҙым ғына!
Упҡындан - тик аҙым арабыҙ.
Ошо Ергә, барлыҡ кешеләргә
Әсәй күҙе менән ҡарағыҙ!
Ҡатын күҙе менән ҡарағыҙ!

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# ЫСЫН ҠАҺАРМАН КЕМ?

Асыҡ витриналар, реклама менән биҙәлгән стендтар. Фантастик пейзаж фонында 9-10 йәштәр тирәһендәге Айнур исемле малай сит планетанан килгән басҡынсыларға ҡаршы һуғыша. Еңдем, генә тигәндә: "Айнур, Айнур улым", - тигән таныш тауыш ишетелә. Әйләнеп ҡараһа, фантастик кейемдә уның әсәһе тора! "Әсәйем миңә ярҙамға килгән!" тип ҡыуана малай. Шул ваҡыт әсәһе тағы ла: "Улым, йә инде, уян йоҡондан..." тип ҡабатлай. Малай йоҡонан уяна. "Эх, төш кенә булған икән!" тип үкенеп ҡуя Айнур.

- Улым, торорға ваҡыт, ҡояш күптән ҡалҡты, - тип, әсәһе йылмайып тәҙрә ҡорғанын асты. - Батырым, әйҙә, йыуынып ал да, ашарға ултыр.

- Хәҙер, әсәй, - тип Айнур карауатта ултырған килеш бүлмәне һөҙөп ҡарап сыҡты ла, иҙәндә ятҡан робот, монстрҙар, супермен уйынсыҡтарына күҙ һалды. Бүлмәнең стенаһында торған Терминатор плакатына ҡарап алды.

- Айнур, йыуын, мин тиҙҙән киләм. Ҡартатайыңды тыңлап ҡына тор, яраймы? - тине әсәһе. - Самаһыҙ тауышланма, ҡартатайыңа тыныслыҡ кәрәк.

- Ярай, әсәй! - тип яуапланы малай.

Ҡартатаһының ҡунаҡҡа килеүен көтөп ала малай. Уның менән урамда йөрөргә ярата. Ҡартатаһы янында малай нимә теләй, шуны эшләй. Ул уны һис тыймай ҙа, шелтәләмәй ҙә. Әсәһе сығып китер алдынан тағы Айнурҙың арҡаһынан ҡағып, яратып алды.

- Мин һиңә яратҡан алма бәлешеңде бешерҙем, бүлмәңде йыйыштырып ал, өйгә эшеңде эшләргә онотма.

- Әлбиттә, әсәй. - Айнур Терминатор торған плакатҡа төртөп күрһәтеп: "Әсәй, миңә шундай бластер алып ҡайт, йәме?" - тине.

- Һинең уйынсыҡтарың былай ҙа бик күп инде ул, - тип ҡуйҙы ишек яғына атлаған әсәһе. - Ярай, иртәгә һатып алырмын, йәме.

- Улым батыр егет булып үҫә, ул үҫкән һайын уйынсыҡтары ла "ҙурая", - тип, Айнурҙы арҡаһынан һөйөп алды ҡартатаһы ла.

Иртәнге ашты ашарға ултырғас Айнур өҫтәлгә робот һынын да ултыртып ҡуйҙы. Ҡартатаһы оҙаҡ итеп ошо роботҡа текләп торҙо ла:

- Улым, был уйынсыҡ нисек атала?- тине.

- Был - робот-трансформер.

- Робот? Ул нимәне аңлата?

- Робот - тимер кеше. Ул хатта утҡа ла бирешмәй!

- Ҡалай шәп! - тип бер-нисә тапҡыр ҡабатланы ҡартатаһы.

Стакандағы һутты эсте лә, малай роботты ҡулына алып, икенсе уйынсыҡтарына йүнәлде. Шул ваҡыт телефон шылтыраны.

- Алло! Самат, сәләм!

- Сәләм, Айнур! Бөгөн урамға уйнарға сығаһыңмы? - Самат тигән дуҫы шылтырата ине.

- Эйе, тик мин әле роботтар ғәскәрен теҙеп бөтөрмәгәнмен, әҙ генә ҡалды... - тине Айнур. - Бөгөн улар араһында шундай шәп һуғыш буласаҡ!

- Айнур, һинең менән бер һалдатымды алыштырып алайым тигәйнем, ә һин миңә шуның өсөн һағыҙ әҙерлә...

- Ярай, һағыҙым бар, ә һинең теге "Галактика һуғышы" геройҙарының ниндәйҙәре бар? Ниндәй һалдат менән алыштырғың килә? Үрмәксекешеме, әллә Бэтменмы?

- Юҡ... Минең бит ғәйәт ҙур ҡылыслы шәп һалдатым ғына бар! Дөрөҫөн әйткәндә, уның бер ҡулы юҡ... Шулай уҡ Бэтменым да юҡ...




- Ярай, Самат, һау бул. Кил, йәме?

Айнур дуҫы менән һөйләшеп бөттө лә, тағы ла фантастик геройҙары донъяһына инеп китте. Бэтменды алып, фатир буйлап йүгерҙе. Ҡулындағы уйынсыҡты былай әйләндереп, тегеләй әйләндереп, төрлө тауыштар сығарып, бер бүлмәнән икенсеһенә йүгереп йөрөнө, йә кире уйынсыҡтары янына барып ултырҙы. Гәҙәттә, малай ҡулына фантастик монстрҙарҙы алһа, бөтөнләй донъяһын онотоп, уйынсыҡтары менән бер туҡтауһыҙ уйнарға әүәҫләнә лә китә. Ейәненең ҡылығын гәзит уҡып ултырған кеше булып, һүҙһеҙ генә күҙәтте ҡартатаһы. Ейөне бер аҙ тынып торған арала:

- Ҡалай шәп уйын! Ниндәй һуғыштар бара! - тип һүҙ ҡыҫтырҙы.

- Ҡартатай, ҡайһы арала бүлмәгә индең ул, мин һине күрмәй ҙә ҡалдым!

Ҡартатай, көлөмһөрәп, улына күҙен ҡыҫып ҡуйҙы һәм:

- Һинең ҡартатайың 1942 йылда разведкаға йөрөнө... - тине.

Айнур уға текләп ҡараны ла, йөҙөнә ышанмаған ҡиәфәт сығарҙы, "Үәт олатай шаярта!" тип уйлап ҡуйҙы .

- Быға тиклем һинең бындай һүрәтең юҡ ине. Был нимә була инде, улым? - тип ҡыҙыҡһынды ҡартатаһы, плакатҡа төртөп күрһәтеп. - Уның һыны гәйәт ҙур батырлыҡ эшләп, ғорурланып баҫып торған кешенеке кеүек...

- Нисек һин уны белмәйһең! Был бит Терминатор!

- Нисек тинең? Тимер... батыр?

- Тер-ми-на-тор. Ул донъяны яуызлыҡтан ҡотҡарған батыр. Уның тураһында кино ла бар.

- Донъяны ҡотҡарған, тинеңме? Тимәк, улым, ул - герой. Хәтерем дә насарайып киткән икән. Ул теге Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡанмы? Бәлки, Фин һуғышындалыр. Әллә Ханхинголдамы?

- Ю-ю-юҡ, ҡартатай, ул бит кинола ғына һуғышҡан!

- Киноламы ни? Шулаймы ни! - тип ауыҙ эсенән мығырҙаны ҡартатай. - Терминатор-Тимер батыр, тимәк, - тине шунан улының сәстәренән һыйпап. Бүлмәнән сығыр алдынан, нимәлер уйлап, туҡтап ҡалды һәм: - Ә бит һинең ҡартатайың ысын һуғышта ҡатнашҡан кеше, - тип, бүлмәнән сығып китте.

Айнур Терминатор торған плакатҡа ҡарап, былай тип өндәште:

- Ҡартатайым шундай шаян кеше... Үҫкәс мин дә Терминатор һымаҡ буласаҡмын... Бәлки, Бэтмен һымаҡ... - тип, уйынсыҡтарына күҙ йүгертте. - Ә-ә-ә, ысынлап та, Хан... хил... Ханхингол нимә була икән? - тип уйланып ҡуйҙы Айнур.

Айнур иҙәндә аунап ятҡан уйынсыҡтары араһынан атаһы тыуған көнөнә бүләк иткән ҙур пулеметты табып алып, тағы фатир буйлап йүгерҙе.

- Тыңлайым, командир. Эйе, аңланым! - тип, пластмасс рацияһына ҡабатланы малай. - Мин Көслө! Алға! Мин еңәм! - тип шкаф ишеген асты ла, автоматты өҫкә күтәреп: - Ут асам! - тигәйне генә, ҡапыл туҡтап ҡалды. Уның алдында ҡартатаһының орден-миҙалдар тағылған костюмы эленеп тора ине. Быға тиклем малайҙың был тиклем күп наградаларҙы күргәне лә юҡ ине. Ҡулдары менән ордендарҙы тотоп ҡараны. Артынса унда яҙылған яҙыуҙарҙы ла уҡып сыҡты. - Былар бит ысын миҙалдар!..

Өҫтәлдән уйынсыҡтарын һыпырып төшөрөп, унда ҡартатаһының костюмын һалды ла, һәр миҙалды яйлап ҡына ҡарарға тотондо. Ҡулдары менән исемдәрен уҡып сыҡты: "Батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ өсөн" - тине үҙ алдына уҡып. - "Еңеү өсөн"...

- Ә быныһы "Сталинградта күрһәткән батырлыҡ өсөн", - тигән тауыш ишетеп, артына боролоп ҡараһа, ҡартатаһы йылмайып баҫып тора.

- Ҡартатай, былар барыһы ла һинекеме? Батырлыҡ һәм еңеү өсөн бирелгәнме?

Ҡартатай кеше моңһоу ғына йылмайҙы:

- Эйе, һуғышта күрһәткән батырлыҡ өсөн... - тип, шкафҡа үрелде һәм унан бер төргәк килтереп сығарҙы.

- Бына, улым, ҡара, - тине ҡартатай төргәктән һуғыш ваҡытындағы фотоһүрәттәрен сығарып. - Дошман илебеҙҙе яулап алырға теләгәйне. Теге, һин әйткәнсә, дошман - ул ысын монстр. Мин дә һуғышҡа йәш кенә көйөнсә киттем. Һуғыш тураһында бер нәмә лә белмәй ҙә инем.

- Ҡартатай, һин ҡурҡмағынмы?

- Әлбиттә, ҡурҡыныс булды. Әммә шул ваҡыттағы һинауҙар беҙҙе ысын батыр итте. Беҙ ҡыйынлыҡтарға бирешмәнек, ғүмерҙең һәр бер сәғәтен ҡәҙерләнек. Ә һуғышта бит, улым, ваҡыт шундай шәп үтә. Ут эсендә үҙең дә тимергә әйләнәһең. Дошман бик ҡырыҫ булды, беҙҙе юк итергә тырышты, ләкин ниәте барып сыҡманы. Шартлаған снарядтарҙан ер һелкенеп торҙо, баш өҫтөнән бер туҡтауһыҙ пуляләр осто. Ләкин беҙ үлемдән дә ҡурҡмайынса, алға, еңеүгә табан барҙыҡ...

Ҡартатаһы шулай фотоһүрәттәрен күрһәтә-күрһәтә, ейәненә һуғыш йылдары хәтирәләрен һөйләне. Айнур уны ауыҙ асып, донъяһын онотоп тыңланы. Әленән-әле һалдат кейемендәге ғорур ҡарашлы егеттең фотоһына күҙ һалды. Бына ниндәй булған уның ҡартатаһы! Сәстәре лә ағармаған, йөҙҙәре лә һырланмаған - ул бит уның ҡартатаһы!

Ҡартатай менән ейән бер-нисә минутҡа тынып ҡалдылар. Һәр кем үҙ уйына бирелде. Ҡарт һалдат һуғыш хәтирәләрен барлаһа, малай ҡартатаһының ысын ҡаһарман, герой булыуына бөйөле яңы, бығаса кисермәгән тойғолар тулҡынында бөүелде. Ғорурланыу тойғоһо ине ул. Ҡартатаһы бит тыуған ерҙе һаҡлаған, яҡлаған! Уның хатта ордендары бар! Шул хәтлем күп ордендар!

Шул ваҡыт кемдер фатир ҡыңғырауына баҫты. Самат дуҫы килеп инде.

- Ҡара әле, беҙ бит һалдаттарыбыҙҙы алыштырырға һөйләшкәйнек. Мин ҙур ҡылыслы һалдатымды спайдер-мэнға алмаштырам! - тип, Самат кеҫәһенән уйынсыҡтарын сығарып, Айнурға һуҙҙы.

- Самат, беләһеңме, спайдер-мэнды мин һиңә былай ҙа бирәм, ә бына робот миңә кәрәкмәй, - тине Айнур шым ғына, үҙе, ишетеп тормаймы икән, тигәндәй, ҡартатаһы яғына күҙ һалды.

- Нисек инде, кәрәкмәй? Улар бит уйынсыҡтар ғына түгел, ысын геройҙар! Ҡара әле бында! - тип уйынсыҡты өҫтәлгә ҡуйҙы Самат. - Күрәһеңме, улар тере!

- Уйынсыҡтар тере түгелдәр! - тип ҡырт киҫте Айнур, шунан Терминатор плакаты өҫтөнә ҡартатаһының фотоһүрәтен йәбештереп ҡуйҙы. Шул саҡ әсәһенең тауышы ишетелде.

- Улым, кил әле бында, бына мин һиңә нимә һатып алдым! - тип ҡыуанып, улының бүлмәһенә килеп инде. Уның ҡулында уйынсыҡ автомат ине.

- Рәхмәт, әсәй, бөтә уйынсыҡтар ҙа - әкиәт кенә... - тине Айнур тағы ла шымыраҡ итеп.

- Улым, һиңә ни булды? Мин һиңә кәрәкмәгән уйынсыҡ һатып алдыммы әллә? - тип аптыранды әсәһе.

- Кем ысын герой, ҡаһарман икәнен мин хәҙер яҡшы беләм, әсәй, - тине Айнур.- Ул ысын һуғышта булған, ысын дошманға ҡаршы һуғышҡан, ҡулына ысын автомат тотоп, донъяны ҡотҡарған!.. Уның бик күп ордендары бар!

- Ысын дошманға ҡаршы кем һуғышҡан? Бер ни ҙә аңламайым... - тине Самат дуҫының ҡапыл үҙгәреүенә аптырап.

-Кем тураһында әйттең әле, улым? - тине әсәһе лә.

- Минең ҡартатайым тураһында, ул - ысын ҡаһарман! - тип, Айнур ҡартатаһының һалдат кейемендәге фотоһүрәтенә төртөп күрһәтте.

...Айнурҙың бүлмәһе стенаһында хәҙер Терминатор, башҡа фантастик персонаждар плакаттарының эҙе лә юҡ хатта, улар урынына Бөйөк Ватан һуғышы геройы - ҡартатаһының ғына фотоһүрәте эленеп тора...

Алмаз ТИМЕРБАЕВ.

АРНАУ

# ЯУГИРЛЫҠ, ИЛЬӨЙӘРЛЕК ДАНЛАНА...

## фильмдарҙа…

**Был тарих ябай, әммә шул уҡ ваҡытта тетрәндергес тә. Ҡасандыр Стәрлетамаҡ районы Аллағыуат ауылында Хәсән Әхтәмов атлы йәш егет йәшәгән. Ул ауылында алма баҡсаһы үҫтерергә хыялланған. Әммә теләген тормошҡа ашырып өлгөрмәгән, 18 йәшендә генә һуғышҡа китеп, Румын ерендә ҡаһармандарса һәләк булған. "Тамыр" телеканалы хеҙмәткәрҙәре әҙерләгән "Алмағас сәскәһе" тип аталған документаль проект ошо тарихҡа нигеҙләнгән һәм Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнала.**



*Хәсән Әхтәмовтың һаҡланып ҡалған берҙән-бер фотоһүрәте һәм "Юрматы ере" комплексындағы таш һыны.*

Хәсән Әхтәмов Румынияның Яссы ҡалаһы эргәһендә фашист танкыларын шартлатҡанда һәләк була. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында Советтар Союзы Геройының яҙмышы менән журналист Фәрит Вахитов ҡыҙыҡһына башлай. Ул яугирҙың тыуған төйәгенә барып, әсәһе менән дә осраша. Был мәлгә ғаиләнең бөтөн документтары янып юҡҡа сыҡҡан була, әммә улының һуңғы хатының эстәлеген әсә кеше мәңгелеккә хәтерендә ҡалдыра. Бөгөнгө көндә Хәрби Дан музейында ғилми хеҙмәткәр булып эшләгән Фәрит Назар улы был турала "Тамыр" телеканалы хеҙмәткәрҙәренә һөйләй.

- Хәсән Әхтәмовтың фажиғәле, әммә яҡты тарихы беҙҙе тетрәндерҙе һәм был проект өҫтөндә эшләй башланыҡ. Геройҙың ерләнгән урынын табырға ярҙам итеүҙәрен һорап, Румыниялағы Рәсәй Федерацияһы Илселегенә мөрәжәғәт иттек, - ти проект етәксеһе Гөлназ Ҡолһарина. - Илселектең 1-се секретары Юрий Матвейчук ярҙамында Румыниялағы һуғыш урындарын төшөрөп кенә ҡалмаҡыҡ, Яссы ҡалаһында Хәсән Әхтәмов исемендәге аллеяға алмағастар ултырттыҡ. 2014 йылдың декабрендә Геройҙың исеме мәңгеләштерелде. Яссыының өс һуғыш - Рустөрөк, Беренсе һәм Икенсе донъя һуғыштары һалдаттары ерләнгән "Этернитатя" зыяратына Герой Хәсән Әхтәмов исеме менән плита ҡуйылды. Румынияға командировкаға барыу өсөн "Мираҫ" ғаиләгә ярҙам итеү, әсәлекте һәм балалыҡты яҡлау хәйриә фонды һәм Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Шарифйән ҡыҙы Мырҙабаева матди ярҙам күрһәтте.

Ветеран-журналист Фәрит Вахитов әйтеүенсә, уға ярты быуат буйына тынғылыҡ бирмәгән был тарихтың тап ошолай тамамланыуы Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын тыныс күңел менән ҡаршы алырға мөмкинлек бирә. "Тамыр" телеканалы хеҙмәткәрҙәре Хәсән Әхтәмовтың хыялын тормошҡа ашырырға ярҙам итте. Үҙ хыялым да тормошҡа ашты. Мин үҙ ҡулдарым менән румын еренә башҡорт алмағастары ултырттым", - ти Фәрит Назар улы.

"Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова" тип аталған документаль фильмдың презентацияһы баш ҡалабыҙ Өфөлә һәм геройҙың тыуған яғында - Салауат ҡалаһында үтте лә инде. Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тамашасылары уны 9 Майҙа ҡарай аласаҡ.

## …мәктәптәрҙә




**Бөйөк Еңеү еңел бирелмәгән беҙгә. Унда яҡынса 700 мең башҡорт ҡатнаша, уларҙың 322 меңе кире әйләнеп ҡайтмай. 200 мең кеше төрлө миҙал-ордендар менән бүләкләнә, ә 285-е Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.**

Беҙ, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары, ошо еңеүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә булдыҡ. Уҡытыусыбыҙ Римма Мирсәйет ҡыҙы Тимербулатова етәкселегендә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир олатайҙарыбыҙ, күршеләребеҙ, ауылдаштарыбыҙ, райондаштарыбыҙ тураһында йыл буйына мәғлүмәттәр туплаҫ, "Дан йырланһын батырҙарға" тигән китап сығарҙыҡ. Китапты яугирҙарҙың фотолары, миҙал-ордендарының һүрәттәре менән биҙәнек. Унда Ауырғазы, Баймаҡ, Ейәнсура, Федоровка, Салауат һәм башҡа районда, сит өлкәләрҙә йәшәгән башҡорт батырҙары тураһында мәғлүмәт тупланды. Араларында Советтар Союзы Геройы, "Ҡыҙыл Йондоҙ", "Батырлыҡ өсөн", беренсе дәрәжә Ватан һуғышы, "Германияны алған өсөн" миҙал һәм ордендарға лайыҡ булыусылар бар.

Тыныс тормош өсөн йәнен аямай көрәшеп, азатлыҡ яулаған батырҙарыбыҙҙы онотторға хаҡыбыҙ юҡ. Уларҙың исемдәре алтын хәрефтәр менән тарих биттәренә яҙылған, уларҙың исемдәре мәңге хәтерҙә. 70 йыл тыныс тормошта, аяҙ күк аҫтында йәшәү - беҙҙең өсөн оло бәхет. Халҡыбыҙға күп юғалтыуҙар, ҡайғы-хәсрәт алып килгән һуғышты башҡа күрергә яҙмаһын. Донъялар имен торһон!

**Илүзә МӨХӘМӘТЙӘНОВА.**

## … спектаклдәрҙә

**Һуғыш һәм гүзәл зат… Был ике төшөнсәне бергә ҡуйыу үҙе үк мәрхәмәтһеҙлек кеүек тойола. Әммә совет ҡатын-ҡыҙҙарының Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшө сикһеҙ, миллионға яҡыны яуҙа дошманға ҡаршы һуғышһа, ҡалғандары тылда хеҙмәт итә. 9 Май байрамы алдынан М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында премьераһы үткән "Ике төш" драмаһы тап тылдағы ҡатын-ҡыҙҙың фиҙаҡәрлеге тураһында.**



*Роман Шумнов фотоһы.*

Драманың авторы Мөҙәрис Багаев был әҫәрҙә тормошта ысын булған ваҡиғаларҙы һүрәтләй. Унда олатайым менән өләсәйемдең яҙмышы сағыла, ти ул. "Олатайымды, халыҡ дошманы, тип ҡулға алғастар, өләсәйем алты балаһы менән урамда тороп ҡала. Кинйә Арыҫлановтың бүләсәре булған өләсәйем һыр бирмәй, күрше ауылдарға йөрөп, быйма баҫып, мейес сығарып, тире иләп, тун тегеп, балаларын туйындыра. Самандан ғына булһа ла аласыҡ эшләп инә, кемдер бирәү биргән септәлә алты бала теҙелешеп ятып йоҡлап йөрөй. Ошо ваҡиғаларҙы "Ете төш" тигән хикәйәмдә һүрәтләгәйнем, һуғышҡа ҡағылған ике өлөшөн пьеса итеп яҙырға булдым, сөнки бындай яҙмыш, үкенескә күрә, күптәрҙең ғаиләһенә ҡағыла. Һуғыш башланғас иһә, ир-аттың күбеһе яуҙа башын һала, өләсәйем дә өс улына ҡара ҡағыҙ ала. Ҡышлаған башаҡ ашап ағыуланған ҡыҙҙарын кәзә һөтө эсереп һаҡлап ҡала алалар, әммә был әҫәрҙә мин уларҙы шулай уҡ һәләкәткә дусар иттем. Төп героиняны йәлләһәм дә, алдан әйтеүемсә, бындай хәлдәр, бындай хәсрәттәр һәр ғаиләгә ҡағыла, шуға ла ошо бер ғаилә миҫалында уларҙың дөйөм ҡайғыһын күрһәткем килде. Мәғлүмәттәр буйынса, башаҡ ашап ағыуланыусылар иҫәбе Федоровка районы Батыр ауылында ғына 54-кә етә, был хатта яуҙа һәләк булыусыларҙың һанынан күберәк, ундайҙар бөтәһе 49 кеше".

Ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы - тарихыбыҙҙың героик, трагик бите. Әммә һуғыш илдең хәрби һәм иҡтисади ҡеүәтен генә түгел, кешеләрҙең әхлаҡи рухын да һынай. Ғәҙәти булмаған форма - төшкә ҡоролған драмала ил һынау алдында торғанда ла шәхси мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйыусыларҙың вәхшилектәренән, балаларын юғалтыу ҡайғыһынан да юғарыраҡ күтәрелә алған әсә - шул замандың меңәрләгән ҡатын-ҡыҙҙарының әхлаҡи өлгөһө ул. Шуға ла "Ике төш" драмаһы үҙенең тамашасыһын табыр һәм театр репертуарының иң күркәм әҫәрҙәренең береһенә әүерелер, тигән ышаныста спектаклде сәхнәләштереүсе ижади төркөм.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

## …китаптарҙа

**Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған китаптар донъя күрҙе.**




Улар - "Башҡортостан Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында", "Уларҙың ҡаһарманлығы - үлемһеҙ", Талха Ғиниәтуллиндың, Суфиян Поварисовтың һәм Шакир Янбаевтың "Һайланма әҫәрҙәре", "Кеше яҙмышы" (төҙөүсеһе Сабир Шәрипов); Зәһрә Ҡотлогилдинаның "Һуғыш яралаған бала саҡ", Рәшиҙә Бикмәтованың "Берлинға тиклем!", Екатерина Савельеваның "Еңеү ҡоралы" китаптары, "Еңеү яҙы" буклеты. Был баҫмаларҙа тетрәндергес тарих та, сая ҡаһарманлыҡ та, бөтмәҫ ҡайғы-хәсрәт тә, моңһоу шатлыҡ та, сикһеҙ ғорурлыҡ та сағылдырылған.

Нәшриәттең сайтында урынлашҡан интернет-магазинда Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған байтаҡ электрон баҫмалар һатыуға сығарылды. Улар араһында Әмир Моратовтың "Төбәгемдең батырҙары", Флүрә Низамованың "Әбйәлил батыры", Шамил Иҫәнғоловтың "Һалдаттың яу ҡаһарманлығы" баҫмалары бар. Оҙаҡламай был исемлек Ғабдулла Әхмәтшиндың "Тальян гармун", Галина Осташевскаяның "Шла на фронт девчонка" китаптары менән тулыландырыласаҡ.

**Нәркәс КҮРПӘСОВА.**

***✓ Ситән эргәһендәге ҡар ирегәс, шытып сығып килгән кесерткәнде өҙгөләп ашай инек. Әй йылғаһы боҙҙан асылғас, тәлмәрйен тотоп бешереп ашаныҡ. Көндәр йылытҡас, төрлө үлән ризыҡ булды аслыҡтан миктәгән халыҡҡа.***

ИНТЕРНЕТТАН



# ИНТЕЛЛЕКТҠА...
## нимә йоғонто яһай?

■ Ғалимдар раҫлауынса, билдәле бер диета ҡулланып, күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртергә була. Кешенең күҙенең төҫөн меланин пигменты билдәләй, ә ул үҙгәреп тора. Йәғни, был пигменттың әҙерәк йәки күберәк булыуынан сығып, күҙҙәрҙең төҫө билдәләнә. Ә уның күләменә ризыҡ ярҙамында тәьҫир итергә була. Мәҫәлән, көн һайын сәтләүек, бал ашарға яратыусыларҙың күҙҙәренең төҫө асығыраҡ була. Зәйтүн майы ярҙамында ла йомшаҡ төҫ килеп сыға, сөнки был майҙың составында линолен һәм олеин кислоталары бар. Имбирле сәй күҙҙәрҙең ялтырап тороуына килтерә. Тимергә бай шпинат күҙҙәрҙе сығыуыраҡ итә, сөнки ул күҙҙәрҙе тынысландыра, балыҡ, диңгеҙ продукттары A, B, C, D, E, K витаминдарына, шулай уҡ кальций, тимер, магнийға бай булғанлыҡтан, ошо уҡ тәьҫиргә эйә. Күҙҙәрҙең төҫөнә кейемдең төҫө лә йоғонто яһап, уны бер аҙ үҙгәртеп ебәрә ала.

■ Лондонда үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, баланың һүрәтенә ҡарап, уның үҫмер саҡта интеллектуаль һәләтенең кимәле нисек буласағын билдәләп була. Британия психологтары 15 мең игеҙәкте тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. 4 йәшлек саҡтарында улар кеше һүрәтен төшөрә. Ғалимдар балаларҙың ижадын 12 баллы система менән баһалай. Бынан тыш, балалар интеллект коэффициентына тест үтә. 10 йылдан һуң яңынан үткәрелгән тест һүрәттәр менән 14 йәштәге тест араһында бәйләнеш барлығын асыҡлай. Шулай ҙа ата-әсәләргә баланың һүрәтте насар төшөрөүенә көйәләнергә ярамай. Интеллектҡа күп кенә генетик һәм экологик факторҙар йоғонто яһай. Ә холоҡ үҫешенең нигеҙендә темперамент ята.

■ Бөгөнгө заман биология фәненең иң модалы темаһының береһе - эсәк бактериялары. Улар иммунитетҡа ла, кәйефкә лә, ауырлыҡ массаһына ла йоғонто яһай. Франция менән Эстония тикшеренеүселәре бактерияларға бәйле тағы бер ҡыҙыҡ асыш яһаған. Аппетитты меланотропин гормоны яйлай. Уны икенсе төрлө "туйыу гормоны" тип йөрөтәләр. Эсәк бактериялары ошо гормонға оҡшаған аҡһым бүлеп сығарырға һәләтле. Иммун системаһы уның сит матдә икәнен танып, уға ҡаршы көрәшә башлай, шул саҡта ысын меланотропин да зыян күрә. Был кешенең туҡланыуына нисек йоғонто яһауын асыҡларға тырышып, ғалимдар ҡомаҡтарҙа һынауҙар үткәрә. Эсәктәрендә бындай бактериялар булған ҡомаҡтар башҡа төркөмдәге ҡомаҡтарға ҡарағанда ауырлыҡтарын ныҡ юғалтҡан, йышыраҡ ашаған. Кешеләрҙә үткән һынауҙар күрһәтеүенсә, кешенең аппетиты ни тиклем боҙолған булған, уның ҡанында иммунитет сит аҡһымға ҡаршы бүлеп сығарған антиматдәләр ҙә күберәк табылған. Иң ҡыҙығы, был эффект күп ашап та туймаусыларҙа ла, ашай алмаусыларҙа ла күҙәтелгән. Әгәр ҙә бактерия бүлеп сығарған аҡһым бындай етди сирҙәргә килтерә икән, уны ҡанға анализ тапшырып белеп буласаҡ. Юғиһә, быға тиклем бындай тайпылыштарҙы психологтар ғына дауалай ала, тип иҫәпләйҙәр ине.

■ Швеция ғалимдары раҫлауынса, йоҡоһо туймаған кеше энергия запасын юғары калориялы аҙыҡтан алырға мәжбүр була. Йоҡо туймаһа, ҡәнәғәтлек килтерә торған үҙәктәр эшмәкәрлеге боҙола һәм баш мейеһенең аппетит өсөн яуап биргән өлөшөнә үҙенсәлекле сигнал ебәрелә. Һөҙөмтәлә, йоҡоһо туймаған кеше күберәк ашай башлай, етмәһә, ул майлыраҡ һәм татлыраҡ ризыҡтарға өҫтөнлөк бирәсәк.

ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫ БАЛАЛАРЫ

**Бәләкәй саҡта өлкәндәргә эйәреп, кис ултырырға йөрөй инек. Ниндәй генә хәбәр һөйләшмәй ине улар унда. Берәүҙәр башынан үткәнде бәйән итә, кемдәндер мәҙәк һөйләтәләр йәки йырлаталар. Хәбәр һөйләгән булып, беҙҙе тормошҡа әҙерләгән улар, йәшәргә өйрәткән, яҡшылыҡҡа өндәгән. Һуғыш ваҡытындағы хәлдәрҙе лә йыш иҫләйҙәр ине инәйемдәр. Күпме йылдар үтһә лә, ошо хәтирәләр барыһы ла һаман иҫтә. Ысынлап та, ватандаштарыбыҙҙың фронттағы ҡаһарманлығы, тыуған ер өсөн аяуһыҙ көрәше тураһында бәләкәйҙән китаптарҙан уҡып, кинофильмдар аша күреп үҫтек. Ә эргәбеҙҙә генә шул дәһшәтле көндәрҙең күпме тере шаһиттары, һуғыш ветерандары йәшәне. Бөгөнгө көндә лә беҙҙең арала һуғыш йылдары балалары бар әле.**

# ҠАТЫНДАР КӨТӘЛӘР...



Һуғыш тураһында һөйләгәндә иң тәүҙә тол ҡатын Миңлебикә инәй Ғаязова күҙ алдыма килә. Ул күршелә генә йәшәне, ғүмеренең аҙағынаса һуғыштан ҡайтмаған ирен көттө. Бер үҙенә ҡыйын, тип, мин йәки туғандарым уға иптәшкә ҡунырға керә инек. Ҡасан барһаң да бер үк хәл ҡабатлана торғайны: таң алдынан Миңлебикә әбей йүгереп ишеккә бара ла: "Ғилмишәриф, йөрәккәйем, ҡайттыңмы ни?" - ти. Алданғанын аңлағандан һуң, һығылып илай. Бындай ваҡытта шуныһы ҡыйын - йыуатып та булмай, ярҙам да итә алмайһың. Тәүҙәрәк әбейҙең яуҙа үлгән ирен һаман көтөүенә, яратыуына аптырай инек, аҙаҡ өйрәндек - тоғролоғона хайран ҡалырлыҡ ине шул. Кейәүгә сығып, өс ай йәшәп ҡалған ул ире менән, ҡыҙы Сәүиә тыуған. "Ғилмишәриф мине танымаҫ та инде, бигерәк ҡартайҙым, йәмһеҙләндем", - тип көҙгөнән ҡараған булыр ине. Инәйем Хәҙисә Садиҡ ҡыҙы Ғәниева менән икәүләп һуғыш осорон иҫкә алмаған көндәре лә булмағандыр. Эвакуацияланып, беҙҙең яҡтарға килгән Ленинград кешеләрен исемләп, уларҙың кейемдәрен икмәккә алыштырыуҙарын, һыуыҡ тейгәндә ниндәй үләндәр ҡулланғандарын да иҫләйҙәр ине. Урманда йәшенеп ятҡан ҡасҡындар менән күҙмә-күҙ осрашҡандарын да йыш һөйләнеләр. "Бығылдар һуғыштан ҡасып ятҡандыр инде, ҡайһы берҙә военныйҙар килеп, урмандарҙы һыҙырып эҙләй торғайны", - тип һөйләй

# БАЛ АШАҒАНДАР ОҘАҠ ЙӘШӘЙ



**Һуғыш йылдарындағы ҡайһы бер хәтирәләрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым әле мин дә.**

Мәсетле районының Әбдрәхим ауылы ата-бабаларым төйәге. Әсәйемдең ата-әсәһе - ҡартинәйем Көмөшбикә менән ҡартатайым Хафиз йәшәгән унда. Уларҙың өс ҡыҙы булған: Нәбирә (минең әсәйем), Хәбирә һәм Яңылбикә. Әсәйем үҙенән бер йәшкә оло булған, бергә уйнап үҫкән күрше малайға - Вәхиткә тормошҡа сыға. Улар егерме йыл йәшәп, ун бер балаға ғүмер бирә. Атайым 1942 йылдың көҙөндә һуғышҡа китте. Ул киткәндә Әй йылғаһы туң ине, уларҙың ат менән боҙ өҫтөнән барғанын яҡшы хәтерләйем. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, атайым үҙенең кейеп киткән кейемдәрен почта аша өйгә ҡайтарҙы. Уның әйберҙәренең иң ҡиммәтлеһе - ҡыҫҡа туны булды. Атайым китеп, күпмелер ваҡыт үткәс, беҙҙең өйҙә күрәҙәсе ҡарт булып китте. Әсәйем мейестә ниҙер бешерә ине. Күрәҙәсе ҡарт һике ситендә ултырып, өҫтәлдәге китабына ҡарап, оҙаҡ итеп хәбәр һөйләне. "Ирең һуғыштан ҡайтмай, янында ике балаң ҡалыр, зәғиф балаң етмеш ике йәшкә тиклем йәшәр", - тине. Ул саҡта беҙ биш бала инек. Зәғиф балаң, тигәне мин инем. Миңә йөклө сағында әсәйем киндер һуҡҡан, эсе менән арҡыры ағасҡа терәлеп, тыуыр балаһының бармаҡтарын имгәткән. Бармаҡтарымдың зәғифлеген тормошта бик һиҙмәнем. Бөтә эште лә яҡшы башҡарҙым.

Һуғыш осоронда ауылда тормош ҡырҡа ауырлашты. Иҫ киткес хәйерселек, аслыҡ 1944 йылдың яҙына тура килде. Ауылда йөҙҙән ашыу кеше астан үлде. Һеңлем Рәйсә, ағайым Ишмөхәмәт астан һәләк булдылар.

Оҙаҡламай атайымдың да үле хәбәре килде. Һаҡта торғанда эргәһендә снаряд шартлай һәм снаряд ярсығы уның ашҡаҙан-эсәктәрен аҡтарып ташлай. Яраланған атайым алты сәғәт иҫендә була әле, һөйләшеп ята, командирынан ғаиләһенә хат яҙыуын һорай. Атайым 1944 йылдың 8 апрелендә Псков өлкәһенең Пушкин районы Каменка ауылында үлә. "Юҡтырһың, һин, Аллам!" тип илағаны күҙ алдымда әсәйемдең.

Ситән эргәһендәге ҡар ирегәс, шытып сығып килгән кесерткәнде өҙгөләп ашай инек. Әй йылғаһы боҙҙан асылғас, тәлмәрйен тотоп бешереп ашаныҡ. Көндәр йылытҡас, төрлө үлән (балтырған, алабута, һаҙ йыуаһы, тау йыуаһы, ҡуҙғалаҡ һәм башҡа) ризыҡ булды аслыҡтан миктәгән халыҡҡа. Ул йылдарҙа Әй йылғаһында балыҡ күп ине. Йылға тирәләй аҡсарлаҡ, аҡҡош, торна, ҡырағай ҡаҙ күп оялай торғайны.

1946 йыл ваҡиғаларға бай булды. "Һалым түлә!" тип аптыратҡан ир кешенең башына әсәйемдең тәртешкә менән һуғып, башын тишеп, ҡанға батырғанын күҙәттем. Әсәйем милиция килеп, төрмәгә алып китер инде тип көттө. Килмәнеләр.

Бер туған Рәшиҙә апайым 10-сы класты тамамланы. 26 баланан ике бала ғына район үҙәгендә ойошторолған комиссия алдында имтихан бирҙе. Беренсе сентябрҙән Рәшиҙә апайым уҡытырға, мин уҡырға барҙыҡ. Атайымдың ҡыҫҡа тунын кейеп барҙым мәктәпкә. Ваҡытында атайым апайыма тип ботинка алған булған. Ботинкаларҙың икеһе лә һул аяҡтыҡы ине. "Боршоҡ ботинка" тип йөрөттөк. Ҡышын шул боршоҡ ботинканы, атайымдың ҡыҫҡа тунын кейеп, уҡырға ла, утынға ла, бесәнгә лә йөрөнөм. Ботинканың эсенә колхоз идараһы тирәһендә тапҡан ҡағыҙҙы тултырып кейә инем. 1946-1956 йылдарҙа һөйрәп утын, бесән, һалам ташыным, һөҙөмтәлә алға кәкерәйеп ҡалдым.

Һирәк-мирәк күрәҙәсенең һүҙҙәре иҫкә төштө. "Мин 72 йәш йәшәйем, әсәйемдән алда апайым, йә туғаным Фәрҙиән үлә", тип уйлай инем. Ысынлап та, юғары белемле инженер булып эшләгән Фәрҙиән туғаным фажиғәле һәләк булып ҡуйҙы. Шулай итеп, әсәйем ике балаһы менән тороп ҡалды, күрәҙәсенең һүҙе дөрөҫләнде. Мин дә, әсәйемдең 8-се балаһы, 72 йәштә был донъянан китергә әҙерләнеберәк йөрөнөм. Күрәҙәсенең шулай алдан күреп, дөрөҫ әйтеүенә иҫем китеп, сит кешеләргә һөйләнем. Бер ғалим ҡарт, мине тыңлағас: "Күрәҙәсе дөрөҫ әйткән, тик ул һинең умартасы булып китеренде күҙ алдына килтермәгән. Бал ҡорттары умартасының ғүмерен кәмендә 10 йылға оҙайта. Оҙаҡ йәшәгән кешеләр барыһы ла умартасылар, йә бал ашаған кешеләр. Донъяла бал менән сағыштырырлыҡ файҙалы аҙыҡ юҡ", - тип әйтте.

**Ивнәй ШАФИҠОВ,**
**ауыл хужалығы**
**фәндәре кандидаты.**

ине Миңлебикә әбей. "Бығыл" тигәне "беглый", "беглец" тигәнде аңлатҡандыр.

Әсәйемдәр күрше Әлшәй районы Ташлы ауылына йөрөп уҡыған. "Ун биш кеше уҡый башлағайныҡ, аҙаҡтан Гөлсөм, Ғәрифә менән өсөбөҙ ҡалдыҡ, һуңынан улар ҙа, ҡасҡындарҙан ҡурҡып, уҡыуҙы ташланы. Бер мәл иртән дәрескә китеп барабыҙ, саҡ ҡына туңдырған, ҡырпаҡ ҡар төшкән. Алдыбыҙҙан ғына эре аяҡ эҙҙәре үткән. Һалдат итеге эҙе. Беҙҙең үтәһе юл аша сыҡҡан. Ҡараһаҡ, алдыбыҙҙа, юлдың ситендә генә талдарҙы ҡосаҡлап, оҙон буйлы, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан кеше тора. Өҫтөндә шинель. Ҡыҙҙар кирегә йүгермәһә ярар ине, тим. Артыма боролоп, бөтә көсөмә: "Ағааа-ай, тиҙерәк булығыҙ, дәрескә һуңлайбыҙ бит!"- тип ҡысҡырҙым да, ҡыҙҙарҙы етәкләп, алға йүгерҙек. Артта кешеләр килә тип уйланымы, үҙе лә ҡурҡтымы - урынынан да ҡуҙғалманы, өндәшмәне лә теге әҙәм. Уҡыуҙан ҡайтҡанда ла ҡурҡып ҡайттыҡ, ҡыҙҙар ҡабат барманы, бер үҙем йөрөй башланым", - тип һөйләй ине әсәйем. Һәр иҫтәлеге йыр, шиғыр менән үрелә, беҙ рәхәтләнеп тыңлайбыҙ. Билдәле яҙыусы, яҡташыбыҙ Рәис Низамов менән дуҫ булып, уның Өфөгә уҡырға барырға өндәүен дә йыш хәтерләй ине. Тик артабан белем алыуына әсәһе ҡаршы төшкән, ҡыҙ кешегә уҡыу кәрәкмәй, өйҙәге эште белһәң - шул етте, тигән.

Бала сағы һуғыш осорона тура килгән Сания еңгәбеҙ Әхмәтрәхимованың да иҫтәлектәрен тыныс ҡына тыңлап булмай. Ул Бөрйән районы Янһары ауылында тыуған. Ғүмере буйы төҙөлөштә эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан. Бик күп наградалары бар. Иң ҙур теләге - донъялар имен булһын, балалар бәхетле йәшәһен. Һәр еңеү байрамында ветерандар араһында атаһын-әсәһен күргәндәй тоя ул, байрамды ашҡынып көтөп ала.

"Атайым магазинда эшләй ине. Ике-өс ат менән Ишембайға тауарға бара торғайнылар. Бер көндө ни эшләптер уларҙы оҙатырға күп кеше йыйылды. Атайым кәнфит, шәкәр алырға барабыҙ, тине. Аттарға тейәлешеп киттеләр, беҙ, өс бала, әсәйемдең итәгенә йәбешеп тороп ҡалдыҡ. Был мәлдә дүртенсе балаға ла йөн ингән булған. Тауарҙан ике-өс көндә әйләнеп ҡайта торғайнылар, ә был юлы оҙаҡланылар. Әсәйҙән атайҙы таптырабыҙ, ул өндәшмәй. Шулай итеп, беҙҙең ғаиләне пыран-заран килтерәсәк һуғыш башланды. Ҡышҡы һыуыҡтарға аслыҡ михнәте өҫтәлде. Атайҙы күреп тә өлгөрмәгән малай 11 айлыҡ булғас, астан үлеп ҡалды. Мине балалар йортона биргәйнеләр. Ҡышҡы сатлама һыуыҡ. Бер көндө ағайым килеп инде балалар йортона. Ишек тотҡаһын да ысҡындырмай тик тора ишек төбөндә аҫҡа ҡарап. Әсәй менән килгәндер, тип, шатланып йүгереп сығырға итәм. Ә ул миңә кейенергә ҡуша, әсәй үлде, ҡайтабыҙ, ти. Нисек ҡайтҡанбыҙҙыр, белмәйем. Аслыҡтан йонсоған, ҡайғынан шаңҡыған ағайым мине йыуатҡан була. Балаларҙы өйгә бикләп, ашарға эҙләп сығып киткән әсәйем ауыл осонда туңып үлә. Атайығыҙ ҡайтҡансы, тип, өсөбөҙҙө лә Байназар балалар йортона бирҙеләр. Шулай аслыҡтан ҡотолоп ҡалдыҡ. Апайҙарҙың ашлы һыу түккәнен ҡарауыллап тора инек. Биҙрәләрҙе түккәнде күреп тә ҡалабыҙ, яланаяҡ сығып та йүгерәбеҙ. Күмәкләп тотонабыҙ картуф ҡабығын йыйырға. Алып килеп сайҡайбыҙ ҙа, түңәрәк ҡара мейесте уратып, киптереп ашайбыҙ. Балалар йортонда ла аслыҡ үҙен нык һиҙҙерҙе. Ә атайым һуғыштан ҡайтманы. Берүк һәр бала ата-әсәһе менән үҫһен, донъялар имен була күрһен!" - тип теләй еңгәм бөгөн дә.

Ил буйынса күпме ҡатын-ҡыҙҙы тол, балаларҙы етем иткән аяуһыҙ һуғыш. Ул осорҙағы ҡыйынлыҡтарҙы замандаштарыбыҙға, киләсәк быуындарға күрергә яҙмаһын. Именлекте, тыныслыҡты һаҡлайыҡ!

**Рәйзә ӘХМӘТРӘХИМОВА.**
**Дәүләкән районы**
**Мәкәш ауылы.**

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП*

# КОМСОМОЛДАР - ТЫЛДА

**1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында яуланған Еңеүгә комсомол йәштәре лә алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәттәре менән тос өлөш индергән.**

Мәҫәлән, Чапаев исемен йөрөткән колхозыбыҙҙың Абдулла Ғәлиев етәкләгән комсомол ойошмаһы районда иң алдынғыларҙан иҫәпләнгән. Ойошманың 16 комсомол ағзаһы "1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарман хеҙмәте өсөн" миҙалына лайыҡ була. Был миҙалдарҙы уларға II-Миәкәбашҡа алып килеп тапшыралар, шул осорҙа йәштәрҙе "Баҫыу ударнигы" тип аталған район гәзитенә фотоға төшөрөп алалар. Был фотоһүрәт әсәйем Рауза Йыһаншинала һаҡланған. Бөгөнгө көндә фотолағы йәштәрҙең бишәүһе иҫән. Улар илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә йәшәй. Фотоны ҡарап, иҫәндәр һәм уларҙың балалары, ғөмүмән, бар халыҡ, дәһшәтле ауыр йылдарҙы иҫкә алһын, Бөйөк Еңеү ниндәй хаҡ менән яуланыуын онотмаһын ине.

**Гүзәл НИҒМӘТУЛЛИНА.**
**Миәкә районы Илсеғол ауылы.**



*Һулдан уңға: 1-се рәттә: Яхъя Мусин, Шәрипҡол Рәхимҡолов, Зәкәриә Миһранов, Шамил Шәйәхмәтов, Мәжит Хәкимов, Ғилман Миһранов, Рәис Моратов; 2-се рәттә: Рауза Йыһаншина, Ғәйшә Шәйәхмәтова, Абдулла Ғәлиев, Ғилмениса Миһранова, Хәмдиә Рәхимҡолова; 3-сө рәттә: Сания Хәкимова, Сания Заһиҙуллина, Миңлеямал Ишморатова, Ғаффан Миһранов.*

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың бөйөк сере

**Аңығыҙҙы кәрәкле тулҡынға көйләп, уңыш менән идара итеүсе ҡанундарға ярашлы йәшәйһегеҙ икән, ниндәй генә эшкә тотонһағыҙ ҙа уңырығыҙға ышанам. Бынан тыш, эшҡыуарлыҡ алып барыуҙың билдәле моделдәрен файҙаланып, тиҙерәк һәм ябайыраҡ байый алыуығыҙға инанам.**

Шуға иғтибар итегеҙ: мин эшҡыуарлыҡ алып барыу моделдәре тинем, ә эш түгел. Хәйер, кемдер эшләп тә байлыҡ тупларға мөмкин, әммә бик һирәк осраҡта ғына. Үҙ-үҙегеҙгә етәксе булыу байыу өсөн күберәк мөмкинлек бирәсәк. Өс бизнес-моделде берләштереүсе тағы бер үҙенсәлекте тәҡдим итәм - ул да булһа рычаг. Рычаг тип бында аҙ сығымдар менән йәки заем капиталын файҙаланып килем алыу күҙаллана.

Әгәр тарихтан Карнеги, Гетти һәм Гейтс кеүек бай кешеләрҙең эшмәкәрлеген өйрәнһәгеҙ, уларҙың уңыш ҡаҙаныу ысулында рычагтың теге йәки был хәрәкәте формаһын күрерһегеҙ. Рычаг - уңыш ҡаҙаныуҙың бик мөһим өлөшө, унан башҡа һеҙ ваҡытығыҙҙы аҡсаға алмаштыраһығыҙ ғына. Хатта башҡаларҙыҡы менән сағыштырғанда эш хаҡы күпкә юғарыраҡ булған эшегеҙ булғанда ла, һеҙ барыбер эш хаҡы алыу өсөн билдәле бер ваҡыт эшләйһегеҙ. Проблема бары тик нимәлә - бай булыр өсөн был сәғәттәр генә аҙ.

Әгәр һеҙ стоматолог, шәфҡәт туташы йәки табип икән, килемегеҙ көнөнә ҡабул иткән пациенттар һанына бәйлелер. Шулай уҡ башҡа төр профессия эйәһе булһағыҙ ҙа, клиенттарығыҙ сикле. Бындай хәл-торош күпселек профессиялар өсөн хас. Әгәр аҙнаһына 5 көн эшләп, шуның өсөн аҡса алһағыҙ; бер көн эшкә сыҡмаһағыҙ, 4 көн өсөн генә түләйәсәктәр. Күпселек предприятиелар һеҙҙең тормошоғоҙға ныҡлы йәбешеп алған.

Мин ресторан бизнесы менән шөғөлләнгәндә аҙнаһына 80-90 сәғәт, ҡайһы берҙә бер нисә аҙна ялһыҙ эшләй торғайным. Йәғни һеҙ бизнес менән түгел, ул һеҙҙең менән идара итә. Күпселек традицион предприятиеларҙың икенсе проблемаһы - уларҙың көндәлек эшмәкәрлек планы буйынса һеҙгә бәйлелеге, был уларҙы һатыуҙа ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра. Һатып алыусы предприятиеның уңышы уға күпме ваҡыт бүлеүегеҙгә бәйле икәнен күреп, йә осһоҙ хаҡ түләргә тырышасаҡ, йә бөтөнләй алыш-бирештән баш тартасаҡ. Барлыҡ был осраҡтарҙа ла рычаг һөҙөмтәһе юҡ.

Рычаг "ваҡытымды аҡсаға һатам" тигән тоҙаҡтан ҡотолорға ярҙам итәсәк, уны һеҙҙең һәләтегеҙ, белемегеҙ, шулай уҡ финанстарығыҙға ҡарата ла ҡулланырға мөмкин. Рычагты ни тиклем күберәк өлкәлә ҡуллана алаһығыҙ, шул тиклем тиҙерәк байлыҡ табасаҡһығыҙ.

Артабан рычаг ҡулланыу мөмкин булған эшҡыуарлыҡтың өс моделен ҡарарбыҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

### Хөрмәтле Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары!

Һеҙҙе **Бөйөк Еңеү** байрамы менән ҡотлап, ихлас рәхмәт һүҙҙәрен еткерәбеҙ. Еңеү - миллионлаған кешеләрҙең тырышлығы, ҡаҡшамаҫ ныҡышлығы менән яуланған. Шуның өсөн дә был байрам ерҙәге тыныслыҡты һаҡлап ҡала алған халҡыбыҙҙың героизмы һәм батырлыҡ символы булараҡ йөрәктәребеҙҙә мәңгегә һаҡланасаҡ. Ветерандар - санаторийҙың көтөп алынған ҡунаҡтары, улар менән аралашыу, сәләмәтлеген нығытыу беҙҙең өсөн дә оло абруй һәм дәрәжә. Һеҙҙең батырлығығыҙға, рух ныҡлығына һоҡланабыҙ һәм ҡоростай һаулыҡ теләйбеҙ. Киләсәк быуындарға һуғыш һағышы теймәһен, тормошоғоҙ ябай шатлыҡтар - яҡын кешеләрегеҙҙең ихласлығы, һөйөүе менән тулыланһын. Бөйөк Еңеү салюты һеҙҙең йөрәктәрегеҙҙе ҡыуаныстарға тултырһын!

**"Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы.**

* * *

### Хөрмәтле Хәйбулла һәм Ишембай районының һуғыш, тыл һәм хеҙмәт ветерандары!



**Бөйөк Еңеү** байрамы уңайынан ихлас ҡотлауҙарымды ҡабул итегеҙ! Һеҙҙең батырлыҡ өлгөһөндә беҙ ҙә Тыуған илебеҙҙең, һуғышһыҙ тыныс тормоштоң ҡәҙерен белергә өйрәнәбеҙ, уларҙың физаҡәрлеген дауам итеп, Рәсәй һәм Башҡортостандың яҡты киләсәге өсөн бар көсөбөҙҙө һалып хеҙмәт итәбеҙ.

Һеҙгә, туғандарығыҙға, яҡындарығыҙға тыныс тормош, иртәгәге көнгә ышаныс, ныҡлы сәләмәтлек, уңыштар теләйем.

**"Башбланкиздат" йәмғиәтенең генераль директоры Гөлсәсәк Ҡадир ҡыҙы Әлибаева.**

* * *

### Хөрмәтле һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары!

Һеҙҙе **Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы** менән ихлас йөрәктән ҡотлайбыҙ.

45-се йылдың еңеү килтергән яҙы йылдан-йыл беҙҙән алыҫлаша бара. Әммә атайҙарыбыҙҙың, олатайҙарыбыҙҙың батырлығы тураһындағы хәтирәләр йылдар үтеү менән тағы ла баҙыҡланып, быуындан-быуынға тапшырыла килә. Һуғыш фронттан ҡайғы хәбәре алып килмәгән бер ғаилә лә юҡтыр ул, шуның өсөн дә был байрамдың ҡиммәте лә ҙурыраҡ.

Хөрмәтле Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, тыл хеҙмәтсәндәре! Беҙ һеҙҙең менән ғорурланабыҙ, ҡыйыулығығыҙ өсөн рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Сираттағы Еңеү көнөн билдәләп, Тыуған ил азатлығы өсөн һәләк булған миллионлаған кешенең иҫтәлеге алдында башыбыҙҙы эйәбеҙ, тыныслыҡ бүләк итеүсе еңеүселәр быуынына ихтирамыбыҙҙы белдерәбеҙ. Һеҙҙең барығыҙға ла сәләмәтлек, бәхет, аяҙ күк йөҙө теләйбеҙ.

**Өфө ҡалаһының Башланғыс профессиональ белем биреү уҡыу-производство үҙәге.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# АТ ЭСЕРҘЕК ЯҘҒЫ АЙҘА...




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**16-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Буранбай. Башҡортостан. Таянма. Барын. Балта. Ҡәҙерле. Сытыр. Етеһендә. Саңғы. Нурбостан. Ҡайта. Егетлеге. Ала. Ҡурк. Кәрнизле. Йырларһың. Артыҡ. Андыҙлыҡ. Бөлөр. Етен. Тетрәр.Еткерер. Тартыр. Һөйгән. Атабыҙ. Егет. Лиссабон. Икеле. Алалар. Нектар. Етеган. Лион.

**Вертикаль буйынса:** Атай. Ҡурҡалар. Тай. Аватар. Енсек. Ерен. Бута. Рябы. Беснәк. Ҡан. Ереккәнде. Аҡын. Рәтле. Аласыҡ. Рота. Аран. Барт. Атайсал. Арал. Батырҙар. Ромб. Нәҫеле. Касса. Нарзан. Гүйә. Натура. Раунд. Һатҡан. Ышанма. Илһеҙ. Егеҙ. Лапылы. Етмеше. Ҡаҙыҡ.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Май (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (22) дүшәмбе | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |
| 12 (23) шишәмбе | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 13 (24) шаршамбы | 3:46 | 5:16 | 13:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 14 (25) кесе йома | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 15 (26) йома | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |
| 16 (27) шәмбе | 3:41 | 5:11 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |
| 17 (28) йәкшәмбе | 3:39 | 5:09 | 13:30 | 19:46 | 21:16 | 22:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАҠСА



# ТОМАТ

**Томат ултырта торған тупраҡты артыҡ ашларға кәрәкмәй. Әгәр ҙә яҙын түтәлгә тиҙәкте күп һалһаң, томат яҡшы үҫәсәк, әммә сәскәгә тумаланырға ашыҡмаясаҡ.**

● Шул саҡта үҫентенең бер нисә ботағын өҙөп ташларға һәм фосфорлы ашламалар менән туҡландырырға кәрәк. Иң яҡшыһы - һыуҙа иҙелгән тиҙәк (10:1), 10 литр һыуға 40 грамм суперфосфат һәм 1 стакан көл өҫтәргә.

● Әгәр ҙә томат үҫентеләре яй үҫә, япраҡтары һарғая икән, күптәр уға дым етмәй, тип, күп итеп һыу һибә башлай. Дөрөҫөрәге, уға туҡланыу өсөн микроэлементтар етешмәй.

● Азот етешмәһә, үҫемлек үҫмәй, һабаҡтар тиҙ генә ҡатып бара. Уңыш ваҡ була һәм тиҙ өлгөрә.

● Һабаҡ нәҙек, япраҡтар ваҡ һәм шәмәхә төҫөндә икән, томатҡа фосфор етешмәй.

● Калий етешмәгәндә япраҡтарҙың ситтәре һарғайып кибә, һуңынан улар һарғая һәм ҡойола башлай. Томаттарҙа ҡара-һоро һыҙыҡтар барлыҡҡа килә.

● Баҡыр етешмәһә, томаттың сәскәләре ҡойола.

● Баҡсасылар әйтеүенсә, томат үҫентеһен 1 тапҡыр йодлы һыу һипһәң (3 литр һыуға 1 тамсы йод), ул яҡшыраҡ үҫә, ботаҡтарҙы ла күберәк ебәрә, тиҙерәк сәскә ата. Томат күпкә эрерәк була һәм бер нисә көнгә иртәрәк өлгөрә.

# АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ СӘСКӘЛӘР

**Баҡсала йәшелсә, еләк-емештән тыш сәскә лә үҫтергегеҙ килһә, күп йыллыҡтарына өҫтөнлөк бирегеҙ. Сәскәне һайлағанда, ғәҙәттә, уның матурлығы менән бер рәттән, һыуыҡтарға бирешмәүе, артыҡ иғтибар талап итмәүенә лә ҡарарға кәрәк.**

**Астильба** - күләгәлә яҡшы үҫә һәм сәскә ата. Шуға ла уны баҡсаның яҡтылыҡ ныҡ төшмәгән урындарына ултырта алаһығыҙ. Астильбаның тәпәш сорттары ла, бейеклеге 1 метрға еткәне лә бар. Аҡ, ҡыҙыл, алһыу төҫтә сәскә ата. Сәскәләр 10 аҙнаға тиклем ултыра. Астильбаға ваҡытында һыу ҡойоп торһаң, етә. "Aphrodite", "Cattleya" сорттары матур.

**Анемона** - күп йыллыҡтар араһында иң матур һәм нәзәкәтле сәскәлер, моғайын. Төҫө аҡтан алып сағыу ҡыҙылға тиклем. Ҡара тупраҡта һәм күләгәлә яҡшы үҫә. Беҙҙең тәбиғәт шарттарында "Honorine Jobert", "Septembercharm" гибридтары ҡулайлы.

**Гелениум** - оҙаҡ сәскә атыуы менән һоҡландыра. Ҡайһы бер сорттары йәй буйына сәскә ата. Улар ҡояш ярата, иң мөһиме, ваҡытында һыу һибеп тороу. Сортына ҡарап, йәй башында йәки көҙ сәсәләр. Тәҡдим ителгән сорттары - "Waltraud", "Rubinzwerg", "Septembergold".

**Яран гөлө** - ҡышлаған гөлдө йәйгелеккә баҡсаға сығарып ултыртһағыҙ, ул эре сәскәләре менән ҡыуандырыр. Яран гөлө оҙаҡ сәскә атмаһа ла, һуңынан уның япраҡтары сағыу ҡыҙғылт төҫкә инә һәм үҙенсәлекле биҙәк өҫтәй.

**Котовник** - һалҡын тәбиғәтле төбәктәрҙә яҡшы үҫә. Сәскәһенең формаһы һәм төҫө менән бер аҙ лаванданы хәтерләтә. Артыҡ ҡарау талап итмәй, ауырыуҙарға бирешеп бармай, төрлө урында ла үҙен яҡшы тоя. Тәүге тапҡыр сәскә атҡас, сәскәһен ҡырҡып алһаң, ул яңынан сәскә атасаҡ. Котовникты үҫтерергә булһағыҙ, уның "Walker Low", "Six Hills Giant" сорттарына иғтибар итегеҙ.

**Мәк** - сәскәләренең ҙурлығы һәм матурлығы менән арбар. Мәктең иртә сәскәләнә торған сорттары - майиюндә, һуң ата торғандары июнь-июлдә сәскә ата. Ҡояшлы урында, кальцийға бай тупраҡта үҫә.

**Рудбекия** - һарғылт-һары төҫтәге был сәскә йәй аҙағына, көҙ башына сәскә ата. Тамыры ныҡ йәйелеп китеп, бөтөн баҡсаны баҫып алыуы ла бар. Дымлы тупраҡты, ҡояшты ярата. Иң яҡшы сорты - "Goldstrum".

**Хоста** - был сәскәне астильба янына сәсһәгеҙ, бик матур күренәсәк. Хоста сәскәһенең япраҡтары ҙур. Ҡыңғыраулы аҡ йәки алһыу сәскәләре июндә сәскә ата. "Hosta Sieboldieana", "Hosta Fortunei" сорттары матур.

# ҠАУЫНДЫ МИСКӘЛӘ ҮҪТЕР

**Ҡауынды мискәгә сәсеүҙең үҙенең ыңғай яҡтары бар, урынды ла күп алмай. Бының өсөн 200 литрлы иҫке ҙур тимер мискәне ҡулланам.**

Тәүҙә мискәнең тышын аҡ буяу менән буярға кәрәк. Уны яртыһына үлән, бесән, һалам тултырып, өҫтөнән 3-4 биҙрә ҡара тупраҡ һалам. Өҫтөнә марганцовкалы йылы һыу ҡоям да, бер нисә көнгә өҫтөн баҫырып ҡуям. Тупраҡты мискә тулғансы һалмағыҙ.

Орлоҡтарҙы шыттырғас, мискәгә сәсәм дә, пластик шешә менән ҡаплап ҡуям, ә өҫтөнән тағы ябам. Ҡауын шытып сыҡҡас, көн торошона ҡарап, шешәләрҙе алам. Мискәнең уртаһына берәй таяҡ ҡаҙап, уға полиэтилен бәйләйем, төнгөләккә уның менән мискәне ябам, көндөҙ кәрәк булмағанда, алып ҡуяһың. Химикаттар ҡулланмайым, кесерткән үләне төнәтмәһе ҡоям.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# ҮҘЕМ ҮҪТЕРГӘНДЕ ҺАТАМ

**Хәҙер бар халыҡ баҡсасылыҡ миҙгеленә тотонорға тора. Беҙ ҙә көҙөн мул уңыш алыр өсөн иртә яҙҙан уҡ тырышырға кәрәклеген иҫтә тотоп, берҙәм эш башланыҡ. Баҡсабыҙҙа төрлө емеш-еләк, йәшелсә емерелеп уңа - күҙ генә теймәһен. Шуға күрә үҙебеҙгә ҡышҡа етерлек аҙыҡ-түлек кенә әҙерләмәйбеҙ, ә һатыу өсөн дә арттырабыҙ.**

Өй шарттарында әҙерләнгән төрлө һуттар, тоҙланған ҡыяр, помидор, ҡауын, баклажан икралары, бәшмәк һәм башҡа тәмлекәстәр - барыһы ла ҙур һорау менән файҙалана. Улар араһында бәпембәнән эшләнгән варенье ла тәҡдим итеп ебәрәм - уның тәмен бер белгән кеше йыл да мотлаҡ һатып ала. Эшемде башҡа берәүҙә лә булмаған оригиналь рецептар табыуҙан башланым һәм әлеге мәлгә улар бик күп йыйылды.

Ошондай эшмәкәрлеккә тотонған йылдың көҙөндә ни бары 5 банка тоҙланған ҡыяр ғына һата алдым. Ләкин был минең күңелемде төшөрмәне, киреһенсә, дәртемде арттырып, ҡанымды ҡыҙҙырып ҡына ебәрҙе. Клиенттар һанын арттырыу өсөн тәүҙә реклама эшләргә кәрәк. Бының өсөн мин күпләп әҙерләгән тоҙланмаларымды йәлләмәй генә күрше-тирәгә, коллегаларыма, дуҫтарға таратып сыҡтым. Әйҙә, мин әйтәм, тәмен белһендәр. Был аҙымымдың дөрөҫ булыуын икенсе йылда һатылған 100 банка тулыһынса раҫланы. Шулай итеп, йылдан-йыл клиенттарымдың да, ярашлы рәүештә, ҡышҡылыҡҡа тип әҙерләнгән тәмлекәстәр һанын да, арттырҙым. Әйтергә кәрәк, тоҙланмаларҙың хаҡын магазиндыҡынан юғарыраҡ ҡуйһам да, һатып алыусыларҙы был өркөтмәй, сөнки һаулыҡта экономияламайҙар икәнлеген улар яҡшы аңлай. Магазинда 0,75 банка тоҙланған ҡыяр уртаса 70 һум тора икән, мин уны 85 һумға тәҡдим итәм. Ҡағыҙ ҡаптағы, әллә ҡайҙа әллә ниндәй шарттарҙа үҫкән еләк-емештән эшләнгән 1 литр һут, маркаһына ҡарап, яҡынса 50-70 һум, ә өйҙә ҡайнатылған компотты 100 һумға һатам. Сифатлы әйбер һәм аҙыҡ-түлек арзан була алмай, тигән принциптан сығып эш итәм. Һатып алыусыларымдың күп булыуы уның дөрөҫлөгөнә ишаралай түгелме ни? Улай ғына ла түгел, даими клиенттарым йәй башында уҡ әллә нисә банка тоҙланған ҡыяр һәм помидор, башҡа төрлө аҙыҡ-түлеккә заказ биреп ҡуя һәм көҙөн күмәртәләп килеп алып та китә.

Әлеге көндә баҡсабыҙҙың майҙанын ҙурайтып, йәшелсә-емеште тағы ла күберәк сәсәбеҙ. Әлбиттә, бындай ҙур баҡсаның эше лә етерлек, ләкин файҙаһы ла күп. Икебеҙҙең дә уҡытыусы булыуыбыҙ ирем менән бергә йәй буйы баҡсала булырға мөмкинлек бирә. Ялдарында балалар ҙа ярҙамлаша. Ҡайҙалыр сит илдә, етер-етмәҫ аҡсаны тинләп һанай-һанай диңгеҙ буйында ял итеп ятҡансы, үҙебеҙҙең туған тупраҡта, өйрәнелгән климатта ял да итәбеҙ, аҡсаһын да эшләйбеҙ.

Магазин кәштәләре тулып торған емеш-еләктәрҙең береһе лә төрлө буяуҙарһыҙ, консерванттар һәм башҡа төрлө зарарлы ҡушымталарһыҙ эшләнмәй. Уларҙы өйҙә, бар күңел йылынды һалып әҙерләгән, һаулыҡ өсөн бер зыяны булмаған, телде йоторлоҡ тәмле аҙыҡ-түлек янына ҡуйырлыҡ та түгел. Шуға күрә был өлкәлә лә уңышлы эшмәкәрлек алып барырға була.

**Рәйлә ҒӘЛИМОВА.**

ИҪКӘРТЕҮ

# ХӘҮЕФ ТӘ БАР



**Баҡса, тәбиғәт хозурлыҡ ҡына түгел, ул үҙендә ниндәйҙер кимәлдә хәүеф тә туплай икәнен онотмағыҙ. Шул хәүефтәрҙең береһе - тәбиғи сығанаҡлы ауырыуҙар. Улар араһында "сысҡан биҙгәге" йәки бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәге беренсе урында тора.**

Организмға вирус кимереүселәрҙең бүлендектәре аша эләгә. Быға тәбиғәт ҡосағында шәхси гигиена ҡағиҙәләрен һаҡламау һәм хәүефһеҙлек сараларын үтәүгә иғтибар биреп еткермәү ҙә сәбәпсе булып тора. Ауырыу миҙгел характерына эйә һәм сирләүҙең иң юғары осоро май - октябргә тура килә. Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор Идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, былтыр 82 процент осраҡта кешеләр урманда ял иткән ваҡытта зарарланған. Ҡалған 18 осраҡта кешеләр көнкүрештә зарарланған. Бында шуны билдәләп китергә кәрәк: сиргә 20-50 йәшлек хеҙмәткә яраҡлы кешеләр дусар була, уларҙың 74 проценты - ир-ат.

Инфекция симптомдары - тән температураһының ҡапыл ғына 39-40 градусҡаса күтәрелеүе, ауыҙ кибеүе, баш, эс һәм бил тирәһе ауыртыуы, хәлһеҙлек. Шундай осраҡта мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк, сөнки үҙ аллы дауаланыуҙың ахыры насар тамамланыуы мөмкин.

Кимереүселәр йөрөү ихтималлығы булған биналарҙы хлорлы матдәләр менән йыуып таҙартырға кәрәк. Бигерәк тә ҡулдарға һәм тын юлдарына иғтибар бүлегеҙ. Бының өсөн мотлаҡ резина бирсәткә кейегеҙ һәм кәмендә дүрт ҡат марлянан эшләнгән битлек менән ауыҙығыҙҙы һәм танауығыҙҙы ҡаплағыҙ. Бинаны таҙарта башлар алдынан тәүҙә уны ныҡ итеп еләтегеҙ. Мебелдәрҙе, түшәк кәрәк-яраҡтарын ҡояшта киптерегеҙ, йыуып, киптереп, яҡшылап үтекләгеҙ. Һауыт-һабаны яҡшылап йыуығыҙ. дезинфекциялаусы средстволар менән йыуығыҙ. Бары тик ҡайнатылған йәки һауыттарға тултырылған һыуҙарҙы ғына эсегеҙ. Үҙегеҙ менән алып килгән аҙыҡ-түлекте, хатта улар пакеттарҙа булғанда ла, ергә йәки иҙәнгә ҡуймағыҙ. Йыуылған еләк-емеште һәм йәшелсәләрҙе мотлаҡ ҡайнар һыу менән бешекләгеҙ: "сысҡан биҙгәге" юғары температураны күтәрмәй. Был вирус шулай уҡ ультрафиолет нурҙарҙы ятратмай, шуға күрә ҡояш аҫтында булыу зарарланыу хәүефен кәметә. Ҡулдарығыҙҙағы яраланған, һыҙырылған урындарға иғтибар итегеҙ: уларҙы 3 процентлы водород перекисы йәки 70 процентлы спирт йәки йод менән эшкәртергә кәрәк.

ӘЙТЕШ

# НИҢӘ ҺАМАН БЕҘ ЯРЛЫБЫҘ,

## Йәшәһәк тә бик бай илдә?

**Өшөрә менән Айыткужа сәсәндәр башлаған әйтеш эстафетаһын гәзитебеҙҙең 18-се һанынан Йәнһылыу менән Кәфә сәсән үҙ ҡулына алғайны. Йәнһылыу Кәфә сәсәнгә шундай һорауын төбәгәйне:**

Ҡытайҙарға һис һүҙем юҡ -
Аҡылдары ил гиҙә.
Ә һуң башҡорт кемдән кәм,
Ҡасан реванш алыр икән?

**Кәфә сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**

Бер кемдән дә кәм түгелбеҙ,
Пактан-пак намыҫыбыҙ.
Тәҡдиребеҙ - үҙгәрешһеҙ,
Тәрләсә - яҙмышыбыҙ.
Тик шулай ҙа кемдәр алға,
Йәнгә еткерер, тиһәк.
Көтөп кенә ултырһаҡ гел,
Яҙмышҡа башты эйһәк...
Мөгжизәләр бары тыуа
Алға барған юлдарҙа.
Бары ҡайнар йөрәк булһа,
Кәрәк булһа ҡулдарҙа.
Һәр беребеҙ тейешбеҙҙер
Ҡояштай тоҡанырға.
Бының өсөн кәрәк беҙгә
Тарихтан ут алырға...

**Йәнһылыуҙың Кәфә сәсәнгә әйткәне:**

Һай, сәсәнем, үҙекәйен,
Һай, үткер ҙә телекәйен,
Хаҡтың хағы һүҙкәйен.
Йәштәр шәп, тиеп ҡыуана
Йәнһылыу әбекәйен.
Өйрәтәһен ҡытайҙыҡын,
Өйрәтәһен беҙҙекен.
Һеҙ элек тыуһағыҙ әле,
Беҙ белеп тыуған, тиһең.
Мөгжизә көтөп ултырма,
Тот ҡулға кәрәк, тиһең.
Нимә ҡушһаң да үтәйем,
Яуап көтһәң - әйтәйем.
Һис юғында урыҫтыҡын
Һиңә әйтеп үтәйем.
"Гори сам, зажги других!" тип
Өйрәткәйне комсомол.
"Ҡояштай янып йәшәргә!" -
Беҙ яратҡан девиз был.
Һаман ярһыу, ҡайнар әле
Шул саҡ ҡабынған йөрәк,
Мөгжизәгә ҡаршы барам,
Ҡулымда һаман кәрәк.
Донъялар гөл-сәскә булһын,
Эшләһен йәше, ҡарты.
Эйе, сәсән, һүндермәйек
Тарихтың яҡты утын.
Тарихтың утлы тимере
Маңлайға мөһөр баҫһа ла,
Яндырылған ауылдарҙың
Күмере баҙрап ятһа ла,
Мортазинды тарих уты
Терәп ҡуйып атһа ла,
Янған урмандар тупрағы
Табандарҙы өтһә лә,
Көсләп ябылған мәктәптә
Аҡтыҡ дәрттәр һүнһә лә,
Илдә гиҙгән көрсөк көлө
Өмөт осҡонон күмһә лә,
Ут - дуҫ та ул, дошман да ул,
Тарих уты - һабаҡ өсөн.
Ағыу, дарыу ҙа бер заттан,
Тик сама белһен кешең.

**Кәфә сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**

Ҡояш та бит шул уҡ уттан,
Утһыҙ тормош юҡтыр ул.
Ҡояш һүнһә, Ер шары ла
Осоп китер туптыр ул.
"Ут - дуҫ-дошман" тиеүеңә
Һис бер һүҙһеҙ ризамын.
Урталыҡты һаҡлай белгән
Яҡшы бирә экзамен.
Ярҙарынан сыға тормош,
Онотолһа самалар.
Бер туҡтамай сабабыҙ шул
Онотолмай самалар.
Ә бит төптән уйлағанда
Был тормош - мәғәнәһеҙ.
Беҙ донъяға килгәбеҙ ҙә,
Ләхеткә тәгәрәйбеҙ.
Бала өсөн йәшәү, тиһәң,
Уларҙы ла шул көтә.
Ошо хаҡта уйлаһаң гел,
Тыуырға ла өркөтә.
Йыйғаныңдың бөртөгөн дә
Алып китә алмайбыҙ.
Тик шулай ҙа беҙ тормошто
Иң зур бәхет һанайбыҙ.
Һорауым шул: апаҡайым,
Йәшәүҙә ни мәғәнә?
Әйҙә әле ошо хаҡта
Ҡорайыҡ бер әңгәмә?
Ә, юғиһә, байлыҡ, тиеп,
Серетәбеҙ мейене.
Йәшәүһеҙ юҡ мәғәнәһе,
Һүҙем хаҡмы, әйеме?

**Йәнһылыуҙың Кәфә сәсәнгә әйткәне:**

- Хитрый ҙа һин, Кәфәбай.
Ауыҙ ҙа астырмайһың,
Һорауыңа яуап әйтеп
Өлгөрмәй апаҡайың.
Был апай аруҡ йәшәгәс,
Белә, тип уйлауыңмы,
Сығалырмы сетеректән,
Тип әлләә һынауыңмы?
Мәңгелек һорау бирәһең,
Кемдәр башын ватмаған.
Хатта ҡытайлы Конфуций
Аныҡ яуап тапмаған.
Тыуымдан ҡалманым үҙем,
Өркмәй тыуҙым да ҡуйҙым.
Ваҡыты еткәс, үлемдән дә
Ҡалмаҫҡа иҫәп - уйым.
Үлем алмаҫ Тараусылдай
Ҡаңғырырға яҙмаһын.
Үлем - хаҡ, ул заң бит ул,
Таҙартып торһон бағын.
Өс көнләк эшем ҡалды, тип,
Үкенес булыр инде...
Бәйғәмбәрҙән уҙған ғүмер
Беҙҙән дә уҙыр инде.
Кемдәр килмәгән был ергә,
Кемдәр ғүмер кисмәгән.
Мостай сәсәнде беләндер?
Үәт ул әйткән, исмаһам!
"Әсә ҡарынынан сығып, Кеше
Ер ҡарынына керә.
Шул арала йә ул йәшәй,
Йә ғүмер һөрә..."
Был донъяла ике ер бар,
Ике генә урын бар.
Береһенә ҡайтып булмай,
Береһенән ҡайтып булмай,
Икеһендә лә урын тар.
Киң, яҡты донъяға тыуғас,
Шундуҡ тәгәрәмәйек.
Заяға ғүмер һөрмәйек,
Йәшәү ҡәҙерен беләйек.
Мең мәғәнә араһында
Иң дөрөҫ бер мәғәнә:
Йәшәүҙең бар мәғәнәһе -
Кеше булып йәшәүҙә!

**Кәфә сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**

"Һаҡмар буйы ҡыҙыл ҡырсын,
Ҡырсындарын ҡыҙырҙым.
Үтеп барған ғүмерҙәрҙең
Алдарында һыҙғырҙым..."
"Ғүмеркәйем, үтмәй тор,
Нужна күрмә никакуй.
Ҡиблаларҙан елдәр иҫһә,
Һалам менән тыҡ та ҡуй..."
"Кеше тыуһа, тыуһын әйҙә,
Ҡаршылайбыҙ ярты менән.
Кеше үлһә, үлһен әйҙә,
Оҙатабыҙ ярты менән..."
Шулай тиеп йырлағайныҡ
Сәүит замандарында.
Һабантурғай һайрар ине
Баҫыу-яландарында.
Кеше булып йәшәүҙәрҙең
Ни икән арьяғында?
Бер нәмә лә тейәп булмай
Әхирәт арбаһына...
Кеше булғас, кеше булып
Йәшәйбеҙҙер, моғайын.
Донъялыҡта күңел ҡала,
Хәтер ҡала моңайып.
Әйтәләр бит: яҡшы кеше
Тыныс йоҡлай "тегендә".
Ҡарҡылдамай уға ҡарға,
Беҙләп осмай себен дә.
Нисә бөртөк ҡомо булһа
Сахара сүллегендә.
Һәр бөртөгө - мең йыл ғазап,
Гонаһлы үлде һиңән...
Шулай тиеп ҡурҡыталар,
Торалар туҡып ҡына.
Дөрөҫ йәшәп буламы һуң
Гонаһтан ҡурҡып ҡына?
Миңә ҡалһа, йәшәүҙәрҙең
Мәғәнәһе киңерәк.
Шул мәғәнә нисә йылдар
Гел мейемдә "кимерә".
Беҙҙең өсөн кеше булыу
Тоғролоҡтор асылға.
Ғүмер буйы тоғро булыу
Әүәләнмәш хасилға.
Гонаһтыр тим милләтеңде
Башҡаға алыштырыу.
Был бит хатта үҙ-үҙеңде,
Хоҙайҙы алдаштырыу...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәнһылыу менән Кәфә сәсәндең әйтеше артабан да дауам итә. Ягылса менән Супай сәсәндәр сиратҡа баҫты. Өшөрә менән Айыткужа, Йәнһылыу менән Кәфә сәсәндәрҙең әйтештәре гәзит уҡыусыларҙа ниндәй фекерҙәр уятты икән - шул хаҡта ла белергә теләр инек. Әйткәндәй, әлегә "битлек"-тәрҙе асмайбыҙ, йәғни сәсәндәрҙең ысын исем-шәрифе конкурсыбыҙҙың аҙағында аталасаҡ икәнен дә белгертеп ҡуяйыҡ. Бәйгелә әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙҘЫҢ ЫҘҒЫШЫ...

## батшаның һуғышы бөтмәҫ

Ил һуғышһыҙ, һуғыш батырһыҙ, батыр ярайһыҙ булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Батша тажы ғына баш ауырыуынан ҡотҡармай.

**(Испан халыҡ мәҡәле).**

Үҙ-үҙен йәлләмәй эшкә тотонғандар ғына байлыҡҡа өлгәшә.

**(Сара Бернар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Кешеләр бәхет эҙләп юлға сыҡҡан. Уларҙың ҡаршыһына әүлиә ҡарт тап булған.**

**- Беҙҙе алда ни көтә? - тип һораған кешеләр әүлиәнән.**

**- Һыу ташҡыны, - тигән әүлиә оҙаҡ уйлап та тормаҫтан.**

**- Улайһа, һыу ташҡынынан нисек ҡотолоу тураһында бер аҡыллы кәңәш бир беҙгә, - тигән кешеләр.**

**- Тәнегеҙҙе хәстәрләүҙән туҡтап, йәнегеҙ тураһында уйлағыҙ, - тигән әүлиә.**

**- Һин беҙгә һыу ташҡынынан нисек ҡотолоу тураһында кәңәш бир! - тип ныҡышҡан кешеләр.**

**- Бөтөн артыҡ нәмәләрегеҙҙе ташлағыҙ ҙа, ҡотолоу юлына еңелсә генә аяҡ баҫығыҙ, - тигән әүлиә һәм юлын артабан дауам иткән.**

**Кешеләр үҙҙәренең артыҡ әйберҙәрен барлай башлаған. "Йорт артыҡ әйбер түгел - унһыҙ бәхетле булып булмай. Йорт йыһаздары ла артыҡ була алмай - уларһыҙ ҡайҙа йоҡлайһың, ҡайҙа ултыраһың? Кейем иң кәрәк әйбер. Аҙыҡ-түлек запаһыҙ ҙа тулы ҡанлы итеп йәшәп булмай", - тип уйлаған кешеләр һәм бөтөн әйберҙәрен дә үҙҙәрендә ҡалдырыуҙы кәрәк тапҡандар.**

**Бына бер саҡ ҡойоп ямғыр яуа, йылғаларҙа һыу таша, кешеләрҙең өйҙәрен һәм ҡаралтыларын һыу баҫа башлаған. Һыу ташҡынынан ҡотолоу сараһын күрергә кәрәк булһа ла, кешеләр ашыҡмаған, уларға тир түгеп тапҡан йорто-ҡаралтыһын, башҡа әйберҙәрен ташлап китеү йәл булған. Бына шулай, үҙенең байлығы тураһында уйлағандар һыу төбөнә киткән, кемдәр әүлиәнең йән тураһындағы һүҙен иҫтә тотҡан, улар еңелсә генә юлға сығып, ҡотолоп ҡалған...**

**...Бәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр Ергә кешеләрҙе буласаҡ бәләләр тураһында иҫкәртеү өсөн Хоҙай тарафынан ебәрелә. Бәйғәмбәрҙе тыңламағандар Алланы ла тыңламай һәм улар һыҙа ҡаты язаға тарттырыла. Ә Алланың кешеләргә еткерер хәҡиҡәте ошо: "Тәнегеҙ тураһында түгел, йәнегеҙ тураһында хәстәрлек күрегеҙ, сөнки йән ул - Мин, ә Миңә һөйөүҙән башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Ләкин һеҙ ахмаҡтарса ҡыланып, ул Һөйөүҙе Миңә түгел, тәнегеҙгә ебәрәһегеҙ. Шуға ла Мин һеҙҙең тәнегеҙҙе йәнегеҙгә ситлек ҡормаһын һәм асылығыҙҙы томаламаһын өсөн ошондай һыу ташҡыны менән йыуҙырам..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 2084